ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

17-23 декабрь (аҡъюлай) 2016

№51 (729)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле


БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Арзан да, иҫертә лә... үлемгә лә илтә




3

Был томлыҡтар...

тарихи аңыбыҙҙы уята




7

Балаларыбыҙҙа баланы түгел...



үҙебеҙҙе яратабыҙ шул инде беҙ 8-9,11

Рухи көсөбөҙ...

телебеҙҙә, моңдарыбыҙҙа, ҡурайыбыҙҙа



12-13

ТВ-программа 14


*Әгәр ҙә һин маҡсатыңа табан китеп барағың һәм һәр юл сатында һиңә ҡаршы өрөп сыҡҡан эттәргә таш бәрергә туҡталаһың икән, ул саҡта һин маҡсатыңа барып етә алмаясаҡһың.*

***(Ф. Достоевский).***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Рәсәй төбәктәрендә карттар һәм инвалидтар йорттарын ябып, өлкән йәштәгеләрҙе ғаиләләргә таратыу буйынса барған кампанияға нисек ҡарайһығыҙ?



***Лилиә ХИСМӘТУЛЛИНА, социаль эш буйынса белгес, Баймаҡ районы:*** Беҙҙә ундай мәсьәлә көн тәртибендә тормай, тип әйтер инем, сөнки Темәс психоневрология интернатын иҫәпләмәгәндә (ә был махсуслаштырылған учреждениены ябыу мөмкин дә түгел), Баймаҡ районында ни бары Түбә ҡасабаһында ғына ҡарттар йорто эшләп килә. Әлегә уны ябыу-фәлән тураһында ла һүҙ барырға тейеш түгелдер, тигән уйҙамын, сөнки ул туп-тулы, урындар юҡ. Уны ябып, ҡарттарҙы ҡайҙа ҡуяһың? Балалары булмағандар ҙа килә, балалары булып та, эскелеккә һабышып, аҙып-туҙып йөрөгәндәрҙең ата-әсәләре лә бар бында. Ишетеп белеүемсә, Сибайҙа коммерция тәртибендә эшләгән пансионат бар, тиҙәр, ә бына ҡарттарҙы үҙ ғаиләһенә алып ҡараусы ғаиләләр хаҡында ишеткәнем юҡ. Бәлки, ҡайҙалыр ауыл ерендә рәсми иҫәптә тормайынса ғына шундай кешелеклелек күрһәтеүсе шәфҡәтле кешеләр барҙыр, ләкин бер кем дә иҫәптә тормай әлегә. Ә бына етем балалар алып ҡарап торған патронат ғаиләләр бар. Тимәк, яңғыҙаҡ ҡарттарҙың күпселеге йә үҙе әле донъя көтөрлөк хәлдә, йә балалары, туғандары тәрбиәһендә йәшәй, тип ҡарарға кәрәк. Был тәбиғи ҙә. Ни тиһәң дә, ауыл ерендә әхлаҡ ҡанундары тотороҡлораҡ шул: олоғайып, кеше көнлө булып ҡалған өлкәндәргә балалары битарафлыҡ күрһәтә алмай барыбер. Хатта балалары булмаһа ла, күршеләре күмәкләшеп ҡарашып торған әбей-бабайҙарҙы беләм. Улар ҡарттар йорто тураһында ишетергә лә теләмәй. Ни әйтһәң инде, йылдар буйы донъяһында үҙ иркенә йәшәп өйрәнгән кеше үҙ теләге менән килә буламы бында? Ғаиләгә алып ҡарау тигәне лә бик күңелдәренә ятып бөтмәйәсәк өлкәндәрҙең, сөнки кеше донъяһына килеп инеү уларҙың иркен сикләйәсәк кенә. Тағы ла шуныһы: аҡсаһына ҡыҙығып, ҡараусылар табылыр ҙа ул, ә ҡарт кешегә сит ғаиләлә мөнәсәбәт төрлөсә булыуы ла бар бит. Бер һүҙ менән әйткәндә, был ҡатмарлы психологик мәсьәлә. Өлкән кеше сабый бала менән бер, тиҙәр. Тимәк, уларҙы ҡарауға алырға теләгән кешеләрҙең дә ниәттәре таҙа, саф һәм эскерһеҙ булырға тейеш, тик бына уларҙың күңелендә ни барын ғына үтәнән-үтә күреп булмай - шуныһы хәүефләндерә...

**(Дауамы 2-се биттә).**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# МИЛЛИ МАТБУҒАТҠА ЯҘЫЛАЙЫҠ!

**"Киске Өфө" гәзитен күптән алдырам һәм яратып уҡыйым. Иҡтисад, сәйәсәт, мәҙәниәт буйынса бик күп ҡыҙыҡлы мәҡәләләр баҫыла был гәзиттә. Хатта оҙаҡ ваҡыт алдырғас, үҙем өсөн ҡыҙыҡлы рубрикалар ҡайһы биттәрҙә урынлашыуын да белеп бөткәнмен.**




Мәҫәлән, шундай рубрикаларҙың береһе - "Тарихнамә", бында башҡорт халҡының тарихы, ҡаһармандары тураһында мәҡәләләр урынлаштырыла. Гәзиттең икенсе битендә урын алған "Зыялылар майҙаны" рубрикаһында милләттәштәрҙе борсоған проблемалар, уларҙы хәл итеү юлдары тураһында яҙыла - улар араһынан да фекерҙәштәр табам. Ғөмүмән, "Киске Өфө" гәзитендә башҡорт кешеһененең рухи донъяһын байытырлыҡ мәҡәләләр генә баҫыла. Милли ғөрөф-ғәҙәттәр, боронғо йолалар, милли кейем, ауыҙ-тел ижады, әҙәбиәт, халыҡ дауаһы, тел, тәрбиә, иман һәм башҡа темалар буйынса даими рәүештә һәр башҡорт кешеһененең күңеленә ятырлыҡ итеп яҙыла.

Шул мәҡәләләрҙе уҡыйым да, башҡорт халҡының мәнфәғәттәрен ҡайғыртҡан ошондай бай йөкмәткеле, үҙебеҙҙең туған телдә баҫылған гәзитебеҙ булыуына шатланып бөтә алмайым. Өфөлә алтынсы синыфтан алып русса уҡып, гел русса һөйләшеп үҫтем һәм йәшерен-батырыны юҡ, саф башҡортса һөйләшеүҙе онотоп бара инем. "Киске Өфө" менән бергә яңынан бөйөк, аһәңле әсә телемдә уҡырға өйрәндем. Шуға мин был гәзиттең ҡәҙерен беләм, уны үҙем ике дана итеп алдырам, әле балаларым өсөн дә өҫтәп яҙылдым. Башҡорт халҡына, беҙҙе борсоған проблемаларға битараф булмаған гәзиткә беҙ яҙылмаһаҡ, кем яҙылыр? Ғөмүмән, башҡорт милли матбуғаты беҙҙең халыҡ өсөн баҫыла һәм үҙ сиратында һәр башҡорттоң яҡлауына мохтаж. Беҙ бик йыш ҡына, башҡорт халҡына берҙәм булырға, бер-береһен күтәрмәләп йәшәргә кәрәк, тибеҙ. Берҙәмлек, тәү сиратта, күмәкләшеп берәй эш эшләүҙән башлана, шуға ла, әйҙәгеҙ, яңы йылда бөтә милләттәштәр дәррәү генә башҡорт гәзит-журналдарына яҙылайыҡ, уларҙың тиражын ун меңгә тултырайыҡ, тигән тәҡдимем бар. Әйҙәгеҙ!

**Илдус ҠОЛҺАРИН.**
**Өфө ҡалаһы.**

12+

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ХАЛЫҠ ТАУЫШЫН...

## түрәләр ҙә ишетһен

***Фәйрүзә КӘРИМОВА, Әбйәлил районы ағинәйе:*** Совет заманаһын хурлап, эш урындарын бөтөрөп, халыҡты эшһеҙ ҡалдырып ҡуйҙылар шул. Элек "халыҡ дошманы" тип Себергә һөрҙөләр, хәҙер аҙыҡ һәм аҡса эҙләп, уларҙың ейән-ейәнсәрҙәре Себергә үҙҙәре теләп китә. Халыҡ һәйбәт йәшәйбеҙ, шөкөр, тип торһа ла, һәр кешенең тиерлек елкәһендә ике-өс кредиты аҫылынып тора. Эше юҡтың ашы ла юҡ, ауыл кешеһенең хәле мөшкөлләнә генә бара. Колхоз-совхоздар булған заманда 7-8-се синыф уҡыусылары йәйгеһен һыйыр һауырға, һарыҡ ҡырҡышырға, бесән сабырға эшкә төшә торғайны. Унда инде балаларға енәйәт ҡылырға, эш боҙорға ваҡыт та ҡалмай, хеҙмәткә лә күнегеп үҫтеләр. Фермала эшләгән балаларҙы ҡалаға театр йә циркка алып бара инек, көҙгөһөн һәр береһенә яңы мәктәп формаһы кейҙереп, уҡырға оҙаттыҡ. Хәҙер атай-әсәй балаһын мәктәпкә нисек йыйырға, ҡайҙан кейем алырға, уҡыу кәрәк-яраҡтарына нисек аҡса еткерергә белмәй йонсой. Мәктәп менән бәйле бәлә быныҡ менән генә лә бөтмәй, йылдан-йыл ауыл мәктәбендә уҡыған балалар һаны кәмей. Йәштәр эш эҙләп ситкә киткәс, ауылда балалар ҡайҙан булһын? Ҡатын-ҡыҙҙар ситтә эшләп йөрөй-йөрөй ҙә, башҡа бер милләт кешеһенә кейәүгә сығып, урыҫ, үзбәк, тажик балалары үҫтерә. Башҡорт ауылдарында ситтәр төпләнә башланы, немецы ла, үзбәге лә ер һатып алып, өй төҙөй.

Яңыраҡ радионан иҫем китеп тыңланым: имеш, атайҙарға ла "капитал" бирергә кәрәк. Был бит йәш ғаиләләргә проблемаларын хәл итергә ярҙам итмәйәсәк. Ярай, күп балалы атайҙарға миллион һум аҡса түләнеләр ҙә ти, тик был аҡсаға бөгөн нимә эшләп була һуң? Ней торлаҡ мәсьәләһен хәл итерлек түгел, ней үҙ эшенде асып булмай. Атайҙарға бирелә торған ул миллиондарҙы күмәк хужалыҡты тергеҙеүгә һалып, эш урындары булдырһалар, шул атайҙар, ирҙәр эшле булып, ғаиләһен аҫырай алыр ине.

Был заманда халыҡҡа ғына өндәшеүҙән файҙа юҡ, халыҡ тауышын түрәләр ишетергә тейеш. Балыҡ башынан серей, тип юҡҡа ғына әйтелмәгән бит. СССР-ҙы тарҡатып, кем нимәгә өлгөрә, шуны урлап бөтөп, эшләгән кешенең ҡәҙере булмаған тормош ҡороп, илде алға ебәреп булмаҫы билдәле ине бит инде. Хәҙер иженеры ла кәрәкмәй илгә, зоотехнигы ла, мал табибы ла эшһеҙ йөрөй. Хаҡлы ялдағы әбей-бабайҙар үлеп бөтһә, күп йәштәр нимә эшләргә лә белмәй тороп ҡалыр. Был бары минең генә фекерем түгел, күптәр ошолай уйлай. Мин 36 йыл буйы мәҙәниәт хеҙмәткәре булып эшләнем, унан 15 йыл партия ойошмаһын, профсоюзды етәкләнем. Мине танып белгән һәр кем күңелендәген йәшермәй, әсенеп: "Тормош нишләп былайға әйләнеп китте әле?" - тип һорай. "Ананды ҡазый баҡҡас, кемгә бараң хөкөмгә", - тигән ҡаҙаҡ мәҡәле бар. Халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртыусы булмағас, аһ-зарыңды һөйләргә кеше лә юҡ шул...

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Рәсәй төбәктәрендә карттар һәм инвалидтар йорттарын ябып, өлкән йәштәгеләрҙе ғаиләләргә таратыу буйынса барған кампанияға нисек ҡарайһығыҙ?

**(Башы 1-се биттә).**

***Марат ӘУХӘҘИЕВ, элекке профсоюз хеҙмәткәре:*** Ҡарттар йорттарын ябыу тураһындағы хәбәр ҙур пансионаттарға ҡағылмай торғандыр, тип уйлайым мин. Шулай уҡ Башҡортостандың бер нисә төбәгендә урынлашҡан, мәҫәлән, Темәс, Ишембай, Салауат, Оло Теләк, Баҡалылағы махсуслаштырылған психоневрология интернаттары хаҡында ла һүҙ бармайҙыр, тием. Быларҙан тыш, һәр районда тип әйтерлек ветерандар йорттарының бәләкәйҙәре лә байтаҡ ине. Улар элегерәк, совет заманында ғүмерҙәре буйы колхоз-совхоздарҙа эшләп-йәшәп, хаҡлы ялға сыҡҡас, ҡарауһыһы булмаған ветерандар өсөн ойошторолдо һәм улар, насармы, яҡшымы - ошоға тиклем ҡарттарға бер ышыҡ һәм хәстәрлек йораты булып килде. Әле ауыл ерҙәрендә колхозды алыштырырҙай бер ниндәй ҙә дөйөм производство булмағас, дәүләттең уларҙы ҡарарға хәленән килмәй башланы. Бына шуларҙы ябыу тураһында һүҙ бара икән, уға аптырарға түгел: ябылмаған нимә генә ҡалды икән хәҙер ауылдарҙа? Тик был хәлдән сығыуҙы аңлатмай шул әле. Киреһенсә, ҡатмарлаштыра ғына. Беренсенән, өлкән кеше күпме йыл бергә йәшәгән йәштәштәренән, ауылынан айырылып, әллә ҡайҙағы ҙур учреждениеға, дөрөҫөрәге, билдәһеҙлеккә сығып китә алмай. Был уның өсөн бик ҙур стресс булыуы бар. Ошо хаҡта интернет тулы хәбәрҙәр: "Иркутскиҙа, Томск һәм Омск, Тверь өлкәләрендә һәм башҡа төбәктәрҙә ҡарттар йорттарын ябыуға ҡаршы протест акциялары, митингтар булып үтте. Якутскиҙағы пансионатта йәшәүселәр ил Президентына асыҡ хат яҙып ебәрҙе. Тверь өлкәһе Таложня ауылында ҡарттар йортон һаҡлап ҡалыу өсөн Мәрхәмәтлелек фонды махсус иҫәп асып, аҡса йыя башланы..." Бына ниндәй ығы-зығы тыуҙырҙы дәүләттең сираттағы популяр булмаған кампанияһы. Икенсенән, ауылдарҙа ошо ҡарттарҙы ҡарап, тәрбиәләп торған күпме хеҙмәткәр эш урынын юғалтасаҡ! Кемдер әйткән бит: илдәге хәлдәрҙе ҡарттар тормошона ҡарап самала, тип. Кеше ҡәҙере һуҡыр тингә тормаған илдә таяҡтың иң ауыры тап ана шул өлкән быуын башына төшә лә инде, ни ҡылаһың...

***Исмәғил АҠЪЮЛОВ, пенсионер, Көйөргәҙе районы:*** Беҙҙә лә бар ине бер ҡарттар йорто, элек совхоз төҙөткәйне. Яңыраҡ уны ябырға итәләр, имеш, тип ишеттем, дөрөҫ булһа. Ундағы өлкән кешеләрҙе ҡайҙа ебәрергә йыйыналарҙыр, тик миңә был хәбәр бер ҙә генә оҡшаманы. Теләктәре булған ғаиләләр ҡарауға алырға ла риза булыр, тик быны ҡарттар теләрме һуң? Аҡсаһы өсөн ҡыҙығыусылар ҙа булмаҫ, тимә. Шунда нимә булыр? Кеше йорто, кеше донъяһына өйрәнеп китеүе ауыр барыбер, әле балаларға ҡунаҡҡа ғына барып ҡайтҡансы ла үҙ өйөндө - үҙ көйөндө һағынып бер булаһың. Юҡ, кеше көнлө булып, сит ҡулдарға ҡалырға яҙмаһын. Әлдә балалар бар, юғиһә, мин дә бит яңғыҙым йәшәйем. Әбейем донъя ҡуйғанға байтаҡ булды инде. Ҡыҙым килеп ҡарап тора. Үҙем дә бирешмәҫкә тырышам. Үҙегеҙгә мәғлүм: мин ғүмер буйы гәзит-журналдар менән дуҫ булдым, хеҙмәттәшлек иттем. Район, республика гәзиттәрендә мәҡәләләрем йыш баҫылды. Әле лә редакциялар мине онотмай, шылтыратып, хәл beләләр, һөйләшәләр, рәхмәт. Ҡарт кешегә тағы ни кәрәк...Әле бына һеҙҙең менән уртаҡлашырға шатлығым да бар: яңы китабым сыҡты. Уны ҡулға алып ҡына тора инем, һеҙ шылтыратаһығыҙ. Тик хәҙер яҙыша ла, уҡый ҙа алмай башланым: күҙҙәр насарланды. Телевизорҙы ла минутлап ҡына ҡарарға ҡуша табиптар. Күберәк хәрәкәт итергә тырышам - бына шулай йәшәп ятам әле. Сәләмәт булып, үҙ өйөндә үҙ көнөндө күреү - ҙур бәхет инде ул беҙҙең йәштә... Ҡарттар йортондағы йәштәштәргә Хоҙай сабырлыҡ, һаулыҡ бирһен. Бирешмәйек әле, ҡорҙаштар!

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылыу дауам итә. 50665 индекслы гәзитебеҙгә - 489 һум 40 тингә, 50673 индекслыһына (предприятиелар һәм ойошмалар өсөн) 515 һум 40 тингә яҙыла алаһығыҙ.**

Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙ даими рәүештә беҙҙең бүләктәргә лайыҡ була килә. Декабрҙә 2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙән бер кеше **"Антология поэзии Башкортостана"**, 2 кеше **Рәшит Назаровтың "Ер һәм Йыһан йыры"**, 1 кеше **Ноғман Мусиндың "Алдар батыр"**, 1 кеше **Әхмәр Үтәбайҙың "Сәхрә"**, 2 кеше **Рәйес Түләктең "Мең дә икенсе кис..."**, 3 кеше **"Бураҡаевтар ижады"**, 10 кеше **Гүзәл Ситдиҡованың "Йәннәт баҡсаһы"**, 10 кеше 2017 йылға **"Башҡортса дини календарь"**, 10 кеше **"Шайтан хәйләләре"** һәм тағы ла башҡа китаптарға лайыҡ буласаҡ.

**Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!**





• Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru. Беҙҙең электрон почта: info@kiskeufa.ru. Беҙҙең блог: blog.kiskeufa.ru.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов БР Фәндәр академияһының 25 йыллығына арналған тантаналы йыйылышта сығыш яһаны. Республика етәксеһе һүҙҙәренсә, бөгөн ғилми тикшеренеүҙәрҙә тармаҡ проблемалары түгел, кешенең йәшәйеше мәсьәләләре алғы планға сыға. Фән кешегә табан йүнәлеш ала. "Берлектәге эшебеҙ үҙгәртелергә, яңыртылырға тейеш. Беҙгә йәш кадрҙар, яңы кешеләр кәрәк, - тине Рөстәм Хәмитов. - Академия илдең һәм республиканың киләсәге өсөн яңы кешеләр әҙерләү менән идара итергә тейеш. Бөтә академия структураларының тәғәйенләнеше тап шунда".

✔ Башҡортостан Хөкүмәте йортонда, биш һәм унан да күберәк бала тәрбиәләгән ҡатын-ҡыҙҙарға "Әсәлек даны" миҙалын тапшырыу тантанаһы булды. 18 йыл эсендә 7,5 меңдән ашыу кеше ошо маҡтау билдәһе менән бүләкләнгән. Был юлы тағы ла 45 ҡатын-ҡыҙ республиканың хөрмәтле әсәләре исемлеген тулыландырҙы. Миҙалдарҙы һәм аҡсалата премияларҙы вице-премьер Салауат Сәғитов тапшырҙы.

✔ Башҡортостан юлдар төҙөү өсөн 178 миллион һум аҡса аласаҡ. Рәсәй Хөкүмәте Рәйесе Дмитрий Медведев юл хужалығы өлкәһендә төбәк программаларын финанс яҡтан тәьмин итеү өсөн төбәктәргә бирелгән трансферттар бүлеүҙе раҫланы. Билдәле булыуынса, 8,7 миллиард һум күләмендәге бюджет-ара трансферттар Федерацияның 83 субъекты бюджеттары араһында бүленгән.

✔ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Дмитрий Шароновты үҙ теләге менән Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары вазифаһынан бушатыу тураһында Указға ҡул ҡуйҙы.

✔ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары, "Өфө" футбол клубы президенты Марат Мәһәҙиев, клубтың генераль директоры Шамил Ғәзизов, команданың элекке баш тренеры Виктор Гончаренко һәм өлкән тренер Сергей Томаров менән осрашты. Төбәк етәксеһе Виктор Гончаренкоға "Өфө" футбол клубының тренеры сифатында уңышлы эшләгәне өсөн рәхмәт белдерҙе һәм ЦСКА-ның баш тренеры вазифаһында яңы ҡаҙаныштар теләне.

✔ ***Нефтекамала хатта автосервиста һәм саунала ла ана шундай закондыҙ эсемлек менән "итәк аҫтынан" сауҙа иткәндәр. Ярай әле бер уяуы тотҡан да полицияға хәбәр иткән. Һөҙөмтәлә саунанан 600 шешә суррогат табылған.***



*ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...*

# АРЗАН ДА, ИҪЕРТӘ ЛӘ... ҮЛЕМГӘ ЛӘ ИЛТӘ

**Күптән түгел үҙәк матбуғат саралары Рәсәй төбәктәре буйынса айыҡлыҡ рейтингын баҫып сығарҙы. Бәхтиһән, беҙҙә "Айыҡ Рәсәй" федераль проекты һәм хатта уның белгестәре лә бар икән.**

Аңлашылыуынса, был проект ҡағыҙҙа ғына көн күрә, ә белгестәр ниндәйҙер аныҡ эш башҡарыу урынына ҡайҙа күпме эскесе барлығын һәм уларҙың ниндәй енәйәт ҡылыуын иҫәпләп, белешмә яҙыу менән шөғөлләнә. Һәр ваҡыттағыса, беҙҙә, ул хоҡуҡ һаҡлаумы, һаулыҡ һаҡлау өлкәһеме, күнелһеҙ статистиканы иҫкәртеү урынына булып өлгөргән ваҡиғалар эҙенән йөрөп, шаҡ ҡатырғыс һандар менән иҫте юйҙырырға яраталар. Әле лә бына эскелек һәм уның эҙемтәләрен фашлаусы төп күрһәткестәр буйынса Рәсәй төбәктәре исемлеге (иң айыҡтарҙан башлап, иң эскеселәренә тиклем) баҫылып сыҡты. Эксперттар иҫерткес эсемлектәр һатылыу, алкоголдән ағыуланып үлеүселәр, эскесе диагнозы ҡуйылғандар һәм иҫерек килеш ҡылынған енәйәттәр һандарынан сығып, айыҡтар һәм аҙаҡҡылар урындарын билдәләгән. Был йәһәттән "алдынғылар" - тәбиғи, исемлек ҡойроғонда һөйрәлә. Иң айыҡ төүге унау иҫәбендә Төньяҡ Кавказ биләмәләре: Ингушетия, Дағстан, Ҡарасай-Черкес, Ҡабарҙа-Балҡар, Ҡалмыҡ, Төньяҡ Осетия, Чечен республикалары, Ставрополь, Белгород һәм Ростов өлкәләре. Исемлек баҫылып сығыуы булды, "Кавказ" трассаһында иҫерек водитель гәйебе менән дүрт машина бәрелешеп, ҡот осҡос һәләкәт булыуы хаҡында хәбәр килде. Унда 8 кеше, шул иҫәптән иҫерек водитель үҙе һәм ике бала һәләк була. Ошо ваҡиғанан һуң Чечен Республикаһында араҡы һатыусы егермеләгән сауҙа нөктәһе ябылып, уларҙың хужалары бындай бизнестан баш тартты...

Бына бит, аңлы, иманлы халыҡ фәҡәт шулай хәл итә мәсьәләне, ә ҡоро хәбәр һөйләп, аҡыл һатып түгел! Мөгәҙәнән тотоп ала ла, йығып та һала. Эскеселәрҙе, тием инде, башҡаса никек енмәк кәрәк уларҙы...




Әлеге рейтингта Башҡортостан 21-се урында килә, тип күрһәтелһә лә, был урталыҡты һис тә алтын тип әйтеп булмай, сөнки ул ысынбарлыҡҡа тап килмәй... Асылда иһә, алкоголь ҡулланыусы халыҡ, айырыуса ауыл ерендә, был ҡыҙҙырғыс эсемлекте магазиндан түгел, ә "кара баҙар"ҙан алыуҙы өҫтөн күрә: һуң - арзан да, иҫертә лә! Шул арҡала отчет биреүселәргә, спиртлы эсемлектәр һатыу кимәле кәмене, тип әйтергә урын ҡала. Ә эскелек һис кәмемәй...

**Башҡортостан буйынса Роспотребнадзорҙың быйылғы 9 айы мәғлүмәттәренә ҡарағанда, сифатһыҙ һәм техник спирт эсемлектәре ҡулланыуҙан ағыуланып үлеүселәр һаны 30,6 процент, йәғни 107 кеше тәшкил итһә, шуларҙың 16-һы - балалар һәм үҫмерҙәр.**

Был нимә тураһында һөйләй? Тимәк, контрафакт эсемлектәрҙе бөтә ерҙә лә еңел генә һатып алырға була, ул хатта, күренеүенсә, балиғ булмаған балалар өсөн дә проблема тыуҙырмай. Ә бит хоҡуҡ һаҡлау органдары, полиция бындай күренештәргә ҡаршы ааyһыҙ көрәш тә алып барғандай. Тимәк, эшләп етерелмәй? Әллә халыҡтың, йәмәғәтселектең дә уяулығы кәрәкме? Ана бит, Нефтекамала, кем уйлаһын - хатта автосервиста һәм саунала ла ана шундай законһыҙ эсемлек менән "итәк аҫтынан" сауҙа иткәндәр. Ярай әле бер уяуы тотҡан да полицияға хәбәр иткән, рәхмәт ауғыры. Һөҙөмтәлә саунанан 600 шешә суррогат табылған. Унда ни мунса инеүселәр һыуға түгел, ағыулы спиртлы эсемлеккә "койонор" өсөн йөрөгәндәрҙер ҙә инде.

Бындай кеше ағыулаусы урындар хаҡында белһәгеҙ, тейешле органдарға хәбәр итеүҙән һис ҡурҡырға ярамай. Ҡурҡҡан хәлдә лә аноним хәбәр итеүҙәргә лә иғтибар биреләсәген онотмағыҙ. Һеҙгә бер ни ҙә янамаясаҡ, тик факттар дөрөҫ булһын. Полиция белешмәләренә ҡарағанда, тап ана шундай шикле нөктәләрҙе тикшереүҙән генә лә ноябрҙең икенсе яртыһында 1000 литрҙан ашыу суррогат тартып алына. Шуныһы хәүефле: бындай ағыулы эсемлектәрҙе, шулай уҡ, халыҡса әйткәндә "фанфурик"-тарҙы хатта законлы эшләп торған ҡәҙимге магазин һәм киоскыларҙа ла һаталар икән. Стәрлетамаҡта шундай бер киоск һатыусыһын тоталар, а Бөрөләге кафенан (!) 60 шешә законһыҙ спиртлы эсемлек табыла. Күмертауҙа -100 литр , Белорет ҡалаһында - 224 шешә, Бөрйән районы Иҫке Собханғолда 180 шешә спиртлы шыйыҡса тартып алына. Бынан тыш, Благовещен, Борай, Дүртөйлө, Мәләүез, Илеш, Туймазы, Стәрлебаш, Ауырғазы, Сибай район һәм ҡалаларында ла шикле спиртлы шыйыҡсалар күпләп табыла. Шуныһы ҡыҙғаныс: ағыулы, шикле-микле техник спирт менән һатыу итеүселәр тотолһа ла штраф түләп кенә ҡотола, ә бит улар закон алдында тейешенсә яуап тоторға, енәйәт яуаплылығына тарттырылырға тейеш. Быйыл йәй Салауат ҡала суды тарафынан шундай законһыҙ шөғөлдәре өсөн ике ир хөкөмгә тарттырыла. Бәхеткә күрә, улар Ырымбурҙан алып ҡайтҡан 2 мең шешә контрафакт эсемлекте һатып өлгөрә алмай ҡала. Экспертиза тикшереүе үткәрелгәндән һуң был эсемлектәрҙең ағыулы булыуы асыҡлана. Бындай шыйыҡса һатып тотолғандарҙың бөтәһен дә енәйәт яуаплылығына тарттырыу кәрәк, сөнки улар - потенциаль кеше үлтереүселәр һәм ғәриплендереүселәр бит!

Ситтән килтерелгән техник спирттан башҡа, көмөшкә "оҫталары" ла көнө-төнө ауылдаштарын юлдан яҙҙырырға тырыша, шунлыҡтан, эскеселәр барлы-юҡлы аҡсаһын бюджетты тулыландырыу урынына шәхси кеҫәләрҙе ҡалынайтыуға һала. Властар теләгәнсә, эскесе бюджетҡа файҙа килтерһә, ҡиммәт булһа ла, законлы хәмер һемереп, сирҙән ҡотолмаһа ла, үлемдән ҡалыр ине (эйе, ғүмер ҡиммәт бирелә беҙҙә), тик арзанды ҡыуып, ҡайһы берәүҙәр иң ҡиммәтле нәмәһен - ғүмерен юғалта... Сәйер альтернатива, тиер бәғзе берәү. Улайһа, өсөнсө, ауыр, ләкин ихтирамға лайыҡ юл да бар: чечендәр миҫалында араҡы һатыуҙы, исмаһам, ауылдарҙа тыйырға һәм эскелектән тыйылырға! Туҡта, ниңә әллә ҡайҙағы чечендәр, ти, беҙҙең үҙебеҙҙә - Башҡортостанда ла бар ундай миҫалдар. Ғәжәп, ләкин факт! Ысын, быйыл октябрҙә Күгәрсен районының Хоҙайбирҙин ауылына барғанда үҙебеҙ күреп-инанып, сикһеҙ шатланышып ҡайттыҡ быға. Ялсы ауылы биләмәһе башлығы Ирек Юдаев был хаҡта шулай тип һөйләне: "Биләмәбеҙҙә алкоголле эсемлек һатыуҙы закон нигеҙендә тыйырға ниәтләгәйнек. Бындай башланғысты урындағы халыҡ үҙе күтәреп сыҡты. Әгәр ҙә уларҙы республика Парламенты депутаттары хупламаһа - был илдә айырым ауылдарҙың алкоголле эсемлек һатыуҙы тыйыу хоҡуғын ғәмәлдә ҡулланыуҙың төүге миҫалы буласаҡ ине. Урындағы магазин кәштәләрендә хәҙер иҫерткес эсемлектәр урынына кефир һәм төрлө һуттар ғына ултыра.

**Урындағы эшҡыуарҙар ҙа алкоголле продукция һатыуҙан баш тартты. Сөнки эскән кеше менән артыҡ байып та булмай, эште лә яйға һалыуы еңел түгел. Ялсы ауыл биләмәһенә ҡараған башҡа 5 ауыл магазиндарында ла ошондай уҡ хәл, араҡы, һыра, коктейль юҡ. Халыҡ айыҡ тормошто үҙе һайланы. 80 проценты алкоголле эсемлектәр һатыуҙы тулыһынса тыйыу өсөн тауыш бирҙе.**

Әлбиттә, хәмер һатыуҙы тыйып ҡына эскән кешене айнытып булмай. Халыҡты мәҙәни, спорт саралары ярҙамында яңылыш юлдан арындырырға кәрәк. Ауылдарҙа төрлө быуын вәкилдәре өсөн түңәрәктәр ойоштороло. Ололар бәйләм бәйләргә йыйылһа, йәштәр күберәк спорт менән мауыға. Һәр мәҙәниәт йортондағы алтаҡтала эскелеккә ҡаршы материалдар осратырға мөмкин. Хатта үткән быуаттан китап кәштәләрендә саңға батып ятҡан эскелеккә ҡаршы әҙәбиәтте лә ихлас уҡыйҙар. Айырым биләмәләрҙә алкоголле эсемлек һатыуҙы тыйыу тураһындағы законды Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары Башҡортостанда ла ҡулланыуҙы яҡлап сыҡҡайны. Ялсы хакимиәте ауылдары был мөмкинлек менән файҙаланырға тәүгеләрҙән булып йөрьәт итте. Урындағы халыҡ был башланғысты төбәк Парламенты ла хупларына ышана ине. Тик әлегә беҙҙең инициативаны хуплаусы юҡ. Тик беҙ был сиклөүгә генә ҡарап ҡул ҡаушырырға йыйынмайбыҙ, көрәшәсәкбеҙ әле..."

Бына шундай һоҡланғыс, бәхиәти бер "утрау" бар республикабыҙҙа. Башҡа райондарҙың ауыл биләмәләре башлыҡтары ошонда килеп, айыҡтар тәжрибәһен өйрәнеп, ауылдаштарына өлгө итеп, урындарҙағы йәмәғәтселеккә таянып, шул эште үҙҙәрендә лә боймоға ашырһа, ҡалай сауаплы, рәхмәтле һәм бөйөк ғәмәл ҡылыныр ине... Бынан бер нисә йыл элек башланған "Айыҡ ауыл" хәрәкәте быуылып ҡалһа ла, халыҡ был эште үҙ башланғысында дауам итеп, эш күрһәтеү өсөн генә түгел, ә йәшәү рәүешен сәләмәтләндереү, тормошобоҙҙо яҡшыраҡ һәм яҡтыраҡ итеү өсөн тырышһа, булдыра аласаҡ, сөнки уның өсөн бер ниндәй матди сығымдар ҙа кәрәк түгел, теләк һәм ихтыяр ғына булһын!

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔ Сергей Плотников Өфөнөң Дим районы хакимиәте башлығы итеп тәғәйенләнде. Баш ҡала мэры Ирек Ялалов коллективты яңы етәксе менән таныштырҙы. Егерме йыл ошо вазифаны биләгән Зыфар Хәкимов хаҡлы ялға сыҡты.

✔ Башҡортостандың Мәғариф министрлығында беренсе урынбаҫар тәғәйенләнде. Ул - быға тиклем республиканың Мәғариф өлкәһендә контроль һәм күҙәтеү идаралығын етәкләгән Әлмира Альберт ҡыҙы Ғәниева.

✔ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов "Кремонини групп" (Gruppo Cremonini, Италия) компанияһы президенты Луиджи Кремонини менән осрашты. Осрашыу барышында Башҡортостан Хөкүмәте менән Inalca компанияһы (Gruppo Cremonini бүлендек предприятиеһы) араһында республикала ит малсылығын үҫтереү өлкәһендә хеҙмәттәшлек тураһында меморандум төҙөлдө. Меморандум 2017-2018 йылдарҙа етенән кәм булмаған юғары технологиялы фидлоттар (нимертеү майҙансыҡтары) төҙөү буйынса проекттарҙы тормошҡа ашырыуҙы күҙ уңында тота.

✔ Башҡортостанда "Аҡмулла нәсихәттәре" республика фольклор байрамы уҙғарылды. Байрам барышында билдәле ғалим, фольклорсы, йәмәғәт эшмәкәре Әхмәт Сөләймәновҡа арналған "Әхмәт әйтеше" бәйгеһе ойошторолдо. Унда Әбйәлил, Белорет, Благовар, Бүздәк, Бөрйән, Ғафури, Дәүләкән, Йылайыр, Иглин, Ҡырмыҫҡалы, Салауат районларынан, Өфө, Учалы һәм Салауат ҡалаларынан профессиональ һәм үҙешмәкәр ҡобайыр әйтеүселәр, шағирҙар, ауыҙтел ижады оҫталары ҡатнашты. 16 декабрҙә фольклор байрамы Миәкә районында дауам итте.

✔ 2017 йылда Башҡортостан ауыл клубтарына һәм муниципаль театрҙарға ярҙам итеү өсөн 46 миллион һумдан ашыу аҡса аласаҡ. "Берҙәм Рәсәй" партияһы ауыл ерендә һәм 50 меңгә тиклем халыҡ йәшәгән тораҡ пункттарҙа урынлашҡан мәҙәни-ял итеү учреждениеларының матди-техник базаһын нығытыуға йүнәлтелгән проекты тормошҡа ашыра башлай. Ҡарар Дәүләт Думаһында партия рәйесе Дмитрий Медведев ҡатнашлығында "Берҙәм Рәсәй" фракцияһы ағзалары менән семинар-кәңәшмәлә ҡабул ителде.

**"Башинформ"дан.**

КӨН ҠАҘАҒЫ

# "УРТАҠ МАҠСАТТАРҒА МОТЛАҠ ӨЛГӘШЕРБЕҘ"



**Уҙған аҙна һуңында Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттарына Мөрәжәғәтнамә менән сығыш яһаны.**

Сығышының башында уҡ дәүләт башлығы республикала социаль-иҡтисади хәлдең тотороҡло булыуын, социаль йөкләмәләрҙең тулыһынса үтәлеүен, инвестицияларға, тәҙәләшкә, эш хаҡына һәм килем кимәленә, эшһеҙлек күрһәткестәренә бәйле хәл-торошто, бер аҙ ҡатмарлашҡандан һуң, әле яҡшыра башлауын билдәләп үтте. Йыл йомғаҡтарына ҡарағанда, сәнәғәт етештереүе индексы, һалым килемдәренең үсеш темпы Рәсәй буйынса уртаса күрһәткестәрҙән юғарыраҡ булмаҡсы икән. Шулай уҡ етәксе тышҡы баҙарҙа ҡуҙәтелгән шарттарҙа, бюджетта сикләүҙәр булғанда, тәү сиратта, эске резервтарға, инновацияларға, өр-яңы идара итеү технологияларын ғәмәлгә индереүгә таянырға кәрәклеген билдәләне: "Донъя үҙгәргән, ошо үҙгәрештәр йылдамлығы арта барған осорҙа һөҙөмтәле идара хәл иткес стратегик ресурс әһәмиәтенә эйә. Иҡтисадтың, финанстың һәм фәнни-техник прогрестың глобалләшеүе, халыҡ-ара хеҙмәт бүленеше киң ҡолас ала бара. Өр-яңы талаптар, хәүефтәр барлыҡҡа килә. Ошондай процестарҙың арта барыуы, уларҙы алдан күҙаллап булмау арҡаһында ҡарар ҡабул итеүҙең ғәҙәти алымдары тамырынан үҙгәрә. Шул уҡ ваҡытта яңы иҡтисади ысынбарлыҡҡа яраҡлашҡан, кешегә, мәғарифҡа, мәғлүмәт технологияларына, идара итеү инновацияларына йүнәлтелгән инвестициялар ярҙамында тейешле иҫәп һала алған төбәктәр ҙур өҫтөнлөккә эйә була. Әле төрлө идара итеү алымдары араһында конкурентлыҡ киҫкенләшә. Хәҙер үткәндәргә ҡарағанда буласаҡ ваҡиғаларҙы алдан күҙаллау, тейешле үҙгәрештәрҙе ваҡытында башлау, ураҡыллы идара итеү мөһим.

Республикабыҙҙағы идара итеү системаһының ҙур дәүләт аппараты структураһы, власть вәкәләттәренең саманан тыш үҙәкләштерелеүе, заманса компетенцияларҙың һәм халыҡ менән аралашыу йәһәтенән йөгөнтөлө алымдарҙың етмәүе кеүек һыҙаттарын әле булһа һаҡлап ҡалыуын танырға кәрәк. Был система үҙгәрештәр артынан өлгөрә алмай, шуға күрә заман талаптарына яуап биреүҙән туҡтай", - тине Рөстәм Зәки улы.

Республика Башлығы алда торған 2017 йылдың Экология һәм махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәләре йылы тип иғлан ителеүенә бәйле, бер нисә мөһим проектты тормошҡа ашырыу бурысы тороуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Был - сәнәғәт һәм коммуналь таҙартыу ҡоролмаларын модернизациялау, төбәк операторҙары ҡатнашлығында көнкүреш ҡалдыҡтары менән эш итеүҙең һөҙөмтәле системаһын ойоштороу. Әле республикала ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары тупланған рәсми полигондар ғына 23 квадрат километрҙы биләй. Законһыҙ сүплектәрҙең һәм улар бысратҡан биләмәләрҙең ысын майҙаны байтаҡҡа ҙурыраҡ. Махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәләренән тәртипкә килтереү, цивилизациялы туризм өсөн шарттар булдырыу, сервис инфраструктураһын камиллаштырыу ҙа кәрәк.

Мөрәжәғәтнамәлә барлыҡ тармаҡтар буйынса ла яңыса ҡараш, яңыса фекерләү, заман менән бергә атлау зарурлығы төп идея булып яңғыраны. Киләсәккә программа документы булып торған сығыштың "Уртаҡ маҡсаттарға мотлаҡ өлгәшербеҙ" тип аталыуы ла юҡҡа түгел. Бары тик бергәләп, бер төптән булып, заман менән бер ҡатарҙан атлағанда, дөйөм эш өсөн һәр кем үҙ өлөшөн индергәндә генә ниндәйҙер һөҙөмтәләргә өлгәшергә мөмкин икәненә ишара булды был.

АФАРИН!

**Өфөлә БР Муниципаль берәмектәрҙең VI съезы булып үтте. Муниципалитеттарҙан, федераль һәм республика дәүләт власы органдарынан 600 делегат ҡатнашҡан сарала Муниципаль берәмектәр советы һәм республиканың урындағы үҙидаралыҡ органдары эшмәкәрлегенә йомғаҡ яһалып, көнүҙәк проблемалар буйынса фекер алышыңды, киләсәккә өҫтөнлөклө йүнәлештәр билдәләнде.**



# БҮЛЕШЕРЛЕК ҠАҘАНЫШТАРЫ БАР

Ултырышта Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов сығыш яһаны. Ул Башҡортостандың баш ҡалаһының үсеш тәжрибәһенән сығып, йәмғәтселектең, бизнестың, властарҙың, коммерция булмаған секторҙың фекерен иҫәпкә алғанда ғына эш һөҙөмтәле булыуын; стратегик планлаштырыу менән бер рәттән, ҡала халҡын борсоған көнүҙәк проблемаларҙы хәл итеү буйынса ла эшмәкәрлек алып барылыуын билдәләне.

Ирек Ишмөхәмәт улы билдәләүенсә, 2012 йылда уҙғарылған социологик һорау алыуҙар һөҙөмтәләре нигеҙендә ҡалала халыҡ өсөн уңайлы мөхит булдырыу буйынса киң күләмле эш башлана. Бөгөн иһә респонденттар һуңғы ике йылда баш ҡалала йәшәү шарттарының яҡшырыуын билдәләй. Һуңғы 4 йылда экология, йәшелләндереү, тәҙәкләндереү, урамдарҙың һәм ихаталарҙың таҙалығы, урамдарҙың яҡтыртылыуы әле генә иң актуаль мәсьәлә булып торһа, бөгөн улар артҡы планға күскән. Хәҙер иһә аҙыҡ-түлеккә һәм дарыуҙарға юғары хаҡтарҙы ауыҙлыҡлайһы, юл тәҙәләшенең сифатлы булыуына өлгәшәһе, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ эшмәкәрлеген яйға һалаһы бар. Хакимиәт даими рәүештә халыҡ фекерен өйрәнеп кенә ҡалмай, ә уларҙың граждандлыҡ әүҙемлеген күтәрергә, урындағы әһәмиәтле мәсьәләләрҙе хәл итеүгә халыҡтың үҙен дә ҡатнаштырырға тырыша. Был йәһәттән асыҡ тыңлауҙар ҙур әһәмиәткә эйә була бара.

Муниципалитеттың иғтибарынан тәрбиә эше лә ситтә ҡалмай. Быйыл вандализм проблемаһы көн үҙәгенә сыҡҡан - баш ҡалала дөйөм милекте һәм ҡала милкен боҙоуҙың, ҡыйратыуҙың ике меңдән ашыу осрағы теркәлгән.

Шулай уҡ торлаҡ төҙөү күләме лә актуаль мәсьәләләр рәтендә тора. Һуңғы йылдарҙа уның күләме артһа ла, был йәһәттән һаман ихтыяж ҙур булып ҡала. Шул уҡ ваҡытта Өфө граждандарҙы иҫке һәм авария хәлендәге йорттарҙан яңыларына күсереү буйынса илдә лидерҙар иҫәбендә. Йыл һайын 500-ҙән ашыу ғаилә яңы фатирлы була. Бынан тыш, күп фатирлы йорттарҙы капиталь ремонтлау буйынса ла етди эш алып барыла, быйыл ғына 439 йорт ремонтланған. Өфө халҡын тәү сиратта үҙҙәре йәшәгән йорттарҙың торошо, йорт ихаталарындағы тәртип, уларҙы тәҙәкләндереү мәсьәләһе борсой. Был йәһәттән дә муниципалитет эҙмә-эҙлекле эш алып бара: территория тәҙәкләндерелә, парковкалар эшләнә, юлдарға асфальт түшәлә, балалар һәм спорт майҙансыҡтары ҡуйыла һ.б.

- Дөйөмләштереп әйткәндә, йәмғәтселек фекерен өйрәнеү һәм анализлау бик һөҙөмтәле, - ти Ирек Ялалов. - Беҙгә артабан да ике яҡлы мөнәсәбәттәрҙең яңы формаларын уйларға кәрәк. Әле бер нисә перспективалы проектыбыҙ бар. Шуларҙың береһе - әүҙем граждандарҙың фекерҙәренән идеялар банкы булдырып, уларҙы артабан бизнес вәкилдәренә тапшырыға. Тағы бер ҡыҙыҡлы проект - "Өфөлә" ("Уфимец") тип аталған мобиль ҡушымта булдырыу. Уға ҡаланы үҫтереү проекттарын индереләсәк һәм тауыш биреү үткәреләсәк. Шулай уҡ тәҙәкләндереү мәсьәләләре буйынса муниципалитет, халыҡ һәм бизнестың берлектәге "воркшоп" проекттын да тормошҡа ашырып ҡарарға мөмкин.

Сығышы һуңында Ирек Ишмөхәмәт улы федераль кимәлдә ихтыяж булған муниципаль тәжрибәләрен республиканың муниципаль берәмектәре етәкселәре менән дә бүлешергә әҙер булыуын белдерҙе.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әҙерләне.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ХАҠТАР АРТЫП КИТКӘН



**Башҡортостанстат социаль әһәмиәтле аҙыҡ-түлектең ҡайһы бер төрҙәренә уртаса хаҡтарҙы баҫтырып сығарҙы.**

Ноябрҙә һарыҡ итенең килограмы 337 һум, һыйыр ите - 295, сусҡа ите - 245, ҡош ите 131 һум торған. Ай һуңында республикала бер килограмм туңдырылған балыҡтың уртаса хаҡы - 132, көнбағыш майы 102 һум тәшкил иткән.

Һөт ризыҡтарына килгәндә, аҡ майҙың бер килограмын - 415, сырҙы 413 һумға һатып алырға мөмкин ине. Республика халҡы 2,5-3,2 процент ҡуйылығындағы пастеризацияланған һөттөң бер литрын 43 һумға һатып алған. Стерилләнгән һөттөң бер литры 57 һум торған.

Ноябрь аҙағында бер тиҫтә йомортҡаның хаҡы 59 һум, бер килограмм шәкәр - 48, бөртөклө ҡара сәй - 672, тоҙ - 10, бойҙай оно 30 һум тәшкил иткән. Бер килограмм ҡарабойҙай - 69, дөгө - 51, тары ярмаһы 28 һумға һатылған.

Ноябрҙә аҡ кәсәнле кәбеҫтәнең бер килограмы 16 һум, башлы һуған һәм картуф - 18, кишер 21 һум тәшкил иткән. Республикала бер килограмм алманың уртаса хаҡы яҡынса 71 һум торған.

## ӨС ИГЕҘӘК - АЛТЫ ҒАИЛӘЛӘ

**Быйыл Башҡортостанда алты ҡатын өс игеҙәк тапҡан. Ун бер айҙа төбәктә бөтәһе 44**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✔Тольяттиҙа көрәш буйынса Рәсәй чемпионаты уҙҙы. Унда 30 төбәктән 200-гә яҡын көрәшсе ҡатнашты. Башҡортостан спортсылары ике алтын, ике көмөш һәм ике бронза миҙал яуланы. Башҡортостандың Милли һәм билбаулы көрәш федерацияһының башҡарма директоры Юнир Ильясовҡа, Стәрлетамаҡ физкультура техникумы директоры Миҙхәт Мосаҡаевҡа, Салауат районынан тренер Адик Нурмөхәмәтовҡа һәм республика йыйылма командаһының өлкән тренеры Рәдиф Аҡсуринға ошо спорт төрөндә "Ҙур ҡаҙаныштар өсөн" көмөш билдәһе тапшырылды.

✔Күләмле ребрендинг сиктәрендә "Рәсәй" авиакомпанияһы Airbus A319 һауа судноһына "Өфө" атамаһын бирҙе. Самолет 128 пассажирға иҫәпләнгән. Уны нигеҙҙә илдә фәйҙаланыу күҙаллана. Баш ҡала аэропортының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, 12 декабрҙә ҡаланың символикаһы төшөрөлгән самолет Санкт-Петербургтан Өфөгә тәүге рейс яһаған.

✔Өфөлә "Бурыслы" иҫкәртеү операцияһы башланды. Ул 24 декабргә тиклем дауам итә. Ҡала Дәүләт автоинспекцияһынан хәбәр итеүҙәренсә, штраф ҡарар көсөнә ингән көндән алып 60 көн эсендә түләнергә тейеш. Ваҡытында түләмәгән осраҡта штраф икеләтә арттырыла йә иһә ғәйепле кеше 15 тәүлеккә тиклем ҡулға алына. Административ штрафты ҡарар сығарылған көндән алып 20 көн эсендә 50 процент күләмендә түләү мөмкинлеге бар.

✔Башҡортостан Хөкүмәте 2016 йылдың III кварталына халыҡтың йән башына уртаса айлыҡ йәшәү минимумы дәүмәлен 8423 һум күләмендә билдәләне. Ул эшкә һәләтле халыҡ өсөн - 8982, пенсионерҙарға - 6885, балаларға 8342 һум тәшкил итә. Билдәле булыуынса, Рәсәй Хөкүмәте III квартал йомғаҡтары буйынса йәшәү минимумын кәметте. Уның дәүмәле йән башына 9889 һум тәшкил итте, был үткән кварталға ҡарата 67 һумға аҙыраҡ.

✔Башҡортостанда эшенән бушатылыу хәүефе янаған хеҙмәткәрҙәрҙең дөйөм һаны 9077 кеше тәшкил иткән. Республиканың Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы 1 декабргә ҡарата шундай мәғлүмәттәр килтерә. Эшенән бушатылыу ҡурҡынысы янаған хеҙмәткәрҙәрҙең һаны 5167 кеше тәшкил иткән. Ноябрь айында 3827 хеҙмәткәр тулы булмаған хеҙмәт көнө шарттарында эшләгән. Ойошманы ябыу йәки штатты ҡыҫҡартыу арҡаһында йыл башынан 18024 кеше эшенән бушатылған.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ҺИГЕҘ ГИМНАЗИЯ ҺӘМ ЛИЦЕЙҘА...

## туған башҡорт телендә уҡыйҙар

**Ошо көндәрҙә Өфө ҡала округы хакимиәтенең Мәғариф идаралығы "Өфө ҡалаһында этномәҙәни белем биреү: эш тәжрибәһе һәм үҫеш перспективалары" темаһына арналған түңәрәк ҡор үткәрҙе. Унда баш ҡаланың белем биреү учреждениеларында республиканың дәүләт телдәрен, туған телдәрҙе уҡытыу буйынса тупланған тәжрибә, эш һөҙөмтәһе тикшерелде.**



Түңәрәк ҡор күптән түгел Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты тарафынан "Төп дөйөм белемде туған башҡорт телендә биреү проблемаһы" тигән темаға арнап уҙғарылған кәңәшмәнең дауамы булараҡ ҡабул ителде. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов баш ҡаланың мәғариф учреждениеларында башҡорт телен туған тел һәм дәүләт теле булараҡ уҡытыу эше нисек ойоштороолоуына ҡыҫҡаса байҡау яһаны. Артабан Мәғариф идаралығы начальнигы Елена Хаффазова ошо өлкәлә алып барылған эштәр тураһында дөйөм мәғлүмәт еткерҙе.

- Өфөнөң һигеҙ башҡорт гимназия һәм лицейында 5748 бала уҡый, был башҡорт балаларының 52 процентын тәшкил итә, - тине Елена Роберт ҡыҙы. - Ф. Мостафина исемендәге 20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһында һәм М. Иҫҡужин исемендәге 136-сы башҡорт лицейында башҡорт милләтле уҡыусылар һаны иң юғарыһы. Әммә, ҡыҙғаныҫҡа күрә, башҡорт мәктәптәрендә белем алыусы башҡорт балалары йылдан-йыл кәмей бара. Был белем усаҡтарына микрорайондар беркетелеүенә лә бәйле. Шулай итеп, ҡала буйынса туған телдәрҙе өйрәтеү һәм туған телдәрҙә уҡытыу 33 проценттан күберәкте, ә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеү 85 процент тәшкил итә...

Сарала шулай уҡ Өфө ҡала округы хакимиәте Мәғариф идаралығының тел сәйәсәте бүлеге начальнигы Зөлфиә Ханнанова, 40-сы башҡорт балалар баҡсаһы мөдире Нәйлә Вәлиева, Ф. Мостафина исемендәге 20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһы директоры Илдар Моталов, М. Абдуллин исемендәге 109-сы мәктәп директоры Ольга Ғабдуллина, сыуаш йәкшәмбе мәктәбе етәксеһе Леонид Михайлов, әрмән йәкшәмбе мәктәбе директоры Шамам Ахоян, 24-се ҡала мәктәбенең татар теле уҡытыусыһы Зәбирә Риянова сығыш яһаны. Һәр кем үҙе етәкләгән мәғариф учреждениеһындағы эш тәжрибәһе, балаларҙа туған теленә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу, Башҡортостанға һәм бында йәшәгән башҡа милләт вәкилдәренә ихтирамлы ҡараш тәрбиәләү, ата-әсәләр менән тығыҙ бәйләнеш булдырыу йәһәтенән тәжрибәләре менән уртаҡлашты. "Беҙҙең мәктәптә туған телдәрҙе өйрәнеү буласаҡ беренсе синиф уҡыусыларының ата-әсәләре менән күрешеп һөйләшеүҙән башлана. "Мәктәп - ата-әсәләр өсөн" проекты сиктәрендә лекторий ойошторолған. Ата-әсәләргә туған телдә уҡытыуҙың мөһимлеген аңлатабыҙ һәм уларҙы борсоған һорауҙарға яуаптар табырға, мәғлүмәти ярҙам күрһәтергә тырышабыҙ", - тине М. Абдуллин исемендәге 109-сы мәктәп директоры Ольга Ғабдуллина.

Әлбиттә, түңәрәк ҡорҙа ҡатнашыусыларҙың милли мәғариф өлкәһендә кисекмәҫтән хәл ителергә тейешле һорауҙарға айырым туҡталып, фекерҙәр һәм кәңәштәр тыңларға форсаты булманы. Шулай ҙа киләсәктә эште ниндәй йүнәлештә дауам итеү, ҡайһы мөһим мәсьәләләргә айырыуса иғтибар бүлеү кәрәклеге билдәләнде. Өфө ҡалаһы мәктәптәре уҡыусылары башҡорт телен туған тел һәм дәүләт теле булараҡ теләп өйрәнһен өсөн тәү сиратта заман талаптарына тулыһынса яуап биргән дәреслектәр һәм уҡытыу әсбаптары эшләп сығарыу кәрәклеге һыҙыҡ өҫтөнә алынды. Әйткәндәй, М. Аҡмулла исемендәге БДПУ ғалимдары менән баш ҡала педагогтары төҙөгән бишенсе-туғыҙынсы синиф уҡыусыларына башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыу өсөн тәғәйенләнгән уҡыу әсбаптары әле бер нисә мәктәп нигеҙендә тикшереү үтә.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

**426 сабый, 491 ғаиләлә игеҙәк донъяға килгән. Социаль страховка фондының төбәк бүлексәһе бала табыу сертификатын алған ҡатын-ҡыҙҙарҙың балаларын иҫәпләгән.**

Фонд мәғлүмәттәре буйынса, малайҙар ҡыҙҙарға ҡарағанда яҡынса мең ярымға күберәк тыуған. Сабыйҙарҙың уртаса буйы - 52 сантиметр, уртаса ауырлығы - 3 килограмм 300 грамм. Әсәләрҙең уртаса йәше - 29. "Һуңғы йылдарҙа ғаиләлә икенсе һәм унан күберәк балаларҙың тыуыуы күҙәтелә. Икенсе балаһын тапҡан әсәләрҙең һаны дөйөм һандан 43,5 процент тәшкил итә", - тип билдәләнеләр бүлексәнең матбуғат хеҙмәтендә. Ошо осорҙа "Бала табыу сертификаты" программаһын үтәү маҡсатында фондтың республика бүлексәһе медицина ойошмаларына хеҙмәттәргә түләү өсөн 522 миллион һумдан ашыу аҡса йүнәлткән. Медицина хеҙмәттәренә ҡатын-ҡыҙҙарға ауырлы саҡта, бала тапҡанда һәм унан һуң ярҙам күрһәтеү, шулай уҡ тәүге йылда балаға медицина тикшереүен үткәреү инә.

ҠЫҪҠАСА

# ВӘЛИДИГӘ АРНАЛДЫ

✓ Башҡортостанда "Республиканың барлыҡҡа килеүе" тигән түңәрәк өҫтәлдәр циклы асылды. Башҡортостандың 100 йыллығына арналған бер нисә осрашыу халыҡ-ара кимәлдә үтәсәк. Тәүге саралар башҡорт милли хәрәкәтенең етәксеһе Әхмәтзәки Вәлидовтың тыуған көнөнә бағышланды. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты күренекле сәйәси эшмәкәрҙең тыуыуына 126 йыл тулыу уңайынан Сибай, Ишембай һәм Өфө ҡалаларында түңәрәк ҡорҙар уҙғарҙы. Илдең төньяҡ баш ҡалаһында "Башҡортостан" милли-мәҙәни автономияһы вәкилдәре ошо уҡ исемдәге мәҙәни үҙәк һәм "Аманат" башҡорт йәштәре ассоциацияһы менән берлектә Әхмәтзәки Вәлидиҙең һәйкәленә сәскәләр һалды. Һәйкәл Санкт-Петербург дәүләт университетының көнсығыш факультеты ихатаһында ҡуйылған. Ташкентта ла Үзбәкстандың Башҡорт ҡоролтайы түңәрәк ҡор уҙғарҙы һәм Әхмәтзәки Вәлиди урамындағы скверҙа сәскәләр һалды.

✓ Мәскәүҙә, Башҡортостандың Рәсәй Президенты ҡарамағындағы тулы хоҡуҡлы вәкиллегендә, "Халыҡтар һәм мәҙәниәттәр" серияһынан "Башҡорттар" томының исем туйы булды. Сара Рәсәй Фәндәр академияһының Н.Н. Миклухо-Маклай исемендәге Этнология һәм антропология институты ҡатнашлығында ойошторолдо. Сәләмләү һүҙе менән Рәсәй Фәндәр академияһының Этнология һәм антропология институты директоры Марина Мартынова, "Наука" нәшриәтенең баш мөхәррире Татьяна Филиппова, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры вазифаһын башҡарыусы Айбулат Псәнчин, Башҡортостан халыҡтары ассамблеяһы советы рәйесе, Дәүләт Думаһының Милләттәр эштәре буйынса комитеты ағзаһы Зөһрә Рәхмәтуллина сығыш яһаны. Том Рәсәй Фәндәр академияһының Этнология һәм антропология институты, Р. Ғ. Кузеев исемендәге Этнологик тикшеренеүҙәр институты һәм Рәсәй Фәндәр академияһы Урал ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты хеҙмәткәрҙәре көсө менән әҙерләнгән.

✓ Өфө хакимиәте температураның түбәнәйеүенә бәйле уҡыусыларға мәктәпкә бармаҫҡа рөхсәт ителеүе тураһында хәбәр итә. Ҡарар балалар һәм үҫмерҙәр араһында һыуыҡ тейҙереп сирләүҙе иҫкәртеү маҡсатында ҡабул ителгән. Республикала һауа температураһы 25 градустан түбәнәйһә - башланғыс, 28-30 градус һыуыҡ булһа - урта, 31 градустан түбән икән - өлкән класс уҡыусылары дәрес ҡалдыра ала. Әгәр көндөҙ йылытһа, беренсе сменала уҡыусылар ғына мәктәпкә килмәй. Баланың уҡырға барыу-бармауын, һауа шарттарына ҡарап, ата-әсә үҙе хәл итә. Башҡортостандың гидрометеорология һәм тирә-яҡ мөхит мониторинғы идаралығы мәғлүмәттәре буйынса, алдағы көндәрҙә республикала һалҡын һауа торошо һаҡлана. Һауа температураһы 28 градусҡа тиклем түбәнәйә.

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Көс бирер эсемлек

❖ Был эсемлек организмға көс бирә, өҫтәүенә бөйөрҙәргә яҡшы тәьҫир итә. 1 стакан һолоно һалҡын һыуҙа таҙа итеп йыуып, эмаль һауытҡа һалып, 5 стакан һалҡын һыу ҡойорға, талғын утта һыу яртылаш кәмегәнсе ҡайнатырға, һөҙөргә, шул уҡ күләмдә һөт өҫтәргә, ҡайнау хәленә еткерергә, 4 балғалаҡ бал өҫтәп, тағы ла ҡайнатып сығарырға. Йылы көйөнә көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 15 минут алда 100-әр грамм эсергә.

## Ҡан тамырҙары

❖ Баш мейеһе ҡан тамырҙары ҡыҫылыу менән яфаланыусылар сәләмәтлеген нығытыу өсөн кейәү үләнен ҡулланып ҡарай ала. 5 грамм кипкән үҫемлеккә ярты стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 40 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр эсергә. Төнәтмәне аҙнаһына ике көндән артыҡ эсергә ярамай!

❖ 30-ар грамм кейәү үләне, рута һәм мелисса үләндәрен ҡушып, 40 грамм үлән ҡатнашмаһына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, һыуынғансы төнәтергә, һөҙөргә һәм көнө буйы йотомлап эсеп йөрөргә. Һауыҡҡансы эсергә, көн һайын яңы төнәтмә әҙерләргә.

## Арҡа ауыртһа...

❖ Арҡа ауыртыуынан ҡайнар компресс ярҙам итә. Етен туҡыманы ҡайнар һыуға тығып, һығып алырға ла, елкәгә һалырға, башты бер аҙ һулға борорға. Компресты ауыртыу бөткәнсе тоторға.

❖ 2 таҫтамалды ҡайнар һыуҙа еүешләп, арҡаға тулыһынса ябырға. Таҫтамалдар һыуына башлауын тойоу менән уларҙы алырға ла, 15 минут йылы юрған ябынып ятып торорға. Бынан һуң арҡа ауыртыуы бөтә.

## Баш ауыртыуы

❖ 1 балғалаҡ андыҙ тамырына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 10 минуттан һөҙөргә һәм ашарҙан ярты сәғәт алда көнөнә 4 тапҡыр 1/4 стакан эсергә.

## Лейкоз

❖ Лейкоз аҙмаһын өсөн 1 ҡалаҡ ҡарабойҙай сәскәһенә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, һыуынғас, һөҙөргә һәм бер ай буйына көнөнә 3-4 тапҡыр яртышар стакан эсергә. Көн һайын яңы төнәтмә әҙерләргә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

# ХАЛЫҠ МЕДИЦИНАҺЫ

Н. Добролюбов былай тип яҙған: "Немец гимнастикаһына табыныусыларҙан берәүҙең дә үҙ тирәһендә иғтибарға лайыҡ өлгө күрмәйенсә, беҙгә ҡырғыҙ далаларына йәки Башҡортостанға барып ҡайтмауы йәл. Унда гимнастика сәскә ата: көрәш, бағанаға үрмәләү һәм уҙышып йүгереү менән үткән олимп уйындары периодик рәүештә ҡабатланып тора".

Илебеҙ тарихында башҡорттар азатлыҡ һөйөүсе, ҡыйыу йөрәкле халыҡ булып танылды. Сыҙамлылыҡ, көс-таҫыллыҡ, ҡыйыулыҡ тәрбиәләүҙә башҡорт халҡына ауыр күсмә тормош шарттары менән бер рәттән физик культура, спорт менән шөғөлләнеү ҙур булышлыҡ иткән. Физик культураға ылыҡтырыу бала саҡтан башланған. 7-10 йәшлек малайҙар атта ғәжәп оҫта сапҡан, бәйгеләрҙә ҡатнашҡан. Уҡтан атыу, йүгереү, йөҙөү, саңғыла йөрөү һымаҡ физик күнекмәләр нык таралған булған. Шуныһы ғәжәп, уҡтан мәргән атырға өйрәнгәндә ябай сәпкә түгел, ә тере кешегә төҙәп атҡандар. Осоп килгән уҡтан һаҡланыу өсөн кеше, етеҙ хәрәкәт яһап, ситкә тайпылырға һәм һау ҡалырға тейеш булған. Ә башҡорт уғының тишеү көсө бик ҙур. Мәҫәлән, өлкән кеше атып ебәргән уҡ кешене үтәләй тишеп сыҡҡан. Атта сабып барған килеш уҡтан атырға өйрәнгәндәр. Шуға күрә башҡорт уҡсылары үҙ мәргәнлеге менән дан тотҡан һәм дошман менән алышҡанда етди көс булған. 1812 йылда Наполеон яуында ҡатнашҡан Дююн үҙенең мемуарында: "Беҙҙе һөңгө һәм йәйә менән ҡоралланған башҡорттар отрядтары бигерәк йәберләне", - тип яҙған.

Физик үҫешкә күп йәһәттән һунарсылыҡ та булышлыҡ иткән. Бүре, һеләүһен, төлкө, ҡыр кәзәһен ҡыуып алыу бигерәк тә ауырға төшкән. Ҡыуыу атта, ә ҡышын башҡорт саңғыһында (аҫтан тире менән көпләнгән була) үткәрелгән. Ҡыуып барыу ҡайһы ваҡыт бер нисә сәғәткә һуҙылған. Ҡышҡы ҡыуыуҙа ғәҙәттә бер нисә саңғысы ҡатнашҡан. Береһе йәнлекте баҫтырған, ә ҡалғандары кейемде, аҙыҡ-түлекте алып барған. Хәлдән тайған йәнлекте һунарсы суҡмар менән һуғып алған.

Башҡорттарҙағы түбәндәге һаҡланыу сараһы иғтибарға лайыҡ. Айыу, бүре һымаҡ көслө йыртҡыс менән ҡапыл осрашыу хәүефле. Атта барғанда кеше үҙенә күрә һаҡланыу сараһы уйлап тапҡан. Әгәр ат урман эсенә инеүҙән баш тарта икән, тимәк, яҡын-тирәлә ҙур йыртҡыс йөрөй. Тимәк, уяу булырға кәрәк.

Элек милли көрәш бик таралған булған. Унда йәше лә, ҡарты ла ҡатнашҡан. Көрәшселәр, бер-береһен билбау менән уратып алып, "дошманын" үҙ иңбашы аша алып ташлаған, йәки ерҙән бер аҙ айырып, өйрөлтөп килтереп ырғытҡан. Ҡағиҙә рәүешендә "дошманы" ҡалаҡ һөйәктәре менән ергә тейергә тейеш булған. Беренсе ҡорҙа еңеүселәрҙең иң көслөләре араһында көрәш йәнә ҡыҙып китә. Һуңғы - өсөнсө ҡорҙа иң көслө бер-ике батыр билдәләнә.

**Варис ҒҮМӘРОВ.**
**"Башҡорт халыҡ медицинаһы".**
**(Дауамы бар).**

ҺАБАҠТАР

# ХОЛОҠҺОҘЛОҠ...

## ҡартлығында яза ғына



**Сания йылдың үтеүен түҙемһеҙлек менән көтә башланы. Элек көн үтһә, ғүмер уҙа, тип, һәр үткән көнгә үкенеп ултырыр ине. Хәҙер иһә күҙе - минут һайын сәғәттә. Кис еткәнен көтә ул шулай. Хатта календарҙағы иртәгәһе көндө ятҡансы алмаштырып ҡуйғаны ла бар.**

Йыл ғәҙәттәгенән ауыр килде уға. Йондоҙнамә бик яҡшы осор вәғәҙәләһә лә, ҡатын өсөн быйыл төптө киреһе булды. Сәләмәтлегенә бер ҙә зарланғаны булмаһа, һуңғы осорҙа сир-сырхауҙан айырылғаны юҡ. Өҫтәүенә, күрше-күләне менән низағлашып бөттө. Уларҙан да бигерәк, ғүмерҙә булмағанса, суд юлын табарға тура килде Санияға. Ололарҙың ҡағыҙға төшкәнсе, батҡаҡҡа төш, батҡаҡты йыуаһың да китәһең, ә ҡағыҙға бер төшһәң, унан сығыуы ҡыйын, тигәндәре ҡайһылай дөрөҫ. Бына бит суд эше бер йылға яҡын һуҙылды. Олоғайған көнөндә суд юлында йөрөрмөн тип, бер ҙә уйламағайны, әлбиттә, ҡатын.

Бөтәһенә лә үҙе ғәйепле икәнен бик яҡшы белә, әммә судта үҙем ғәйепле, тип ултырып булмай. Үҙең ғариза яҙ ҙа, үҙең баш тартып ултырмайһың бит инде, кеше аптыратып. Хәйер, был хаҡта ауыҙ асып ҡараманы түгел. Әйтте ул, адвокатына ла өндәште, тикшереүсегә лә. Енәйәт эше асылғас, уны ябыу хәҙер Сانияның теләгенә генә бәйле түгел икән.

Сания - яңғыҙ ҡатын. Ике тапҡыр тормошҡа сыҡты сығыуын. Тәүгеһенән утыҙ йәшендә тол ҡалды, икенсеһе менән дә ун йыл ғына бергә йәшәргә насип булды. Тик ни тиклем балалар ятһа ла, әсә булыу бәхетен татыманы ҡатын. Төрлө шифаханаларҙа, дауаханаларҙа дауаланып ҡараны, иң яҡшы врачтарға ла күренде, им-томсолар ҙа ҡалманы, әммә балаға уҙманы.

Икенсегә кейәүгә сыҡҡас, балалар йортонан сабый алырға ла уйлағайны. Тик кеше һүҙенән ҡурҡып, ниәтенән баш тартты. Һуңғараҡ, бәлки, тәүәккәлләрмен, тип, үҙен тынысландырҙы. Ә танһығын туғандарының балаларын һөйөп ҡандырҙы, аҙаҡ балалар баҡсаһына тәрбиәсе булып эшкә урынлашҡас, көнө буйы кеше балалары менән мәж килеп, арып ҡайтты. Бала алыу тураһындағы уйынан шулай яйлап төңөлдө. Хаҡлы ялға сыҡҡансы, яңғыҙлығы бик беленмәне. Тәрбиәләнеүселәренең атай-әсәһе, хеҙмәттәштәре менән аралашты. Ял, байрам көндәрен йә бер танышында, йә икенсеһендә үткәрҙе, үҙе лә өйөнә кеше килгәнен яратты. Ҡыҫҡаһы, өйөнән бер ҡасан да кеше өҙөлмәне.

Тик пенсияға сыҡҡас, тормошо төптө икенсе юҫыҡҡа китер тип кем уйлаған инде. Тәүге мәлдә, әлбиттә, унан кеше өҙөлмәне, үҙе лә ҡунаҡҡа йөрөнө. Тик яйлап таныштары, дуҫтары әйләнәһе тарайҙы. Күптәре балалары, ейән-ейәнсәрҙәре менән ваҡыт үткәреүҙе хуп күрҙе.

Үҙҙәре килмәгәс, аҡрынлап туғандарына йөрөүҙе лә туҡтатты. Шулай Сания бер үҙе торҙо ла ҡалды. Байрамдарҙы, һуңғараҡ хатта тыуған көнөн дә яңғыҙы үткәргәне булды.

Ҡартая килә кешенең тормошҡа ҡарашы ғына түгел, холҡо ла үҙгәрә икән. Үҙ файҙаһын ғына ҡайғыртҡан, иҫәпсел, шиксел, ваҡсыл, мыжыҡ әбейгә әйләнде лә ҡуйҙы. Эргә-тирәһендә кире күренеште генә күрҙе. Ташҡан талағын өйөндә бушатыр кешеһе булмағас, күршеләренә бәйләнде. Подъезд алдындағы гөл-сәскәгә күмелгән түтәлде күрмәҫкә лә мөмкин, ә ундағы яңылыш ҡына һынған ботаҡ, ҡойолған сәскә әбейҙең күҙенә салынмай ҡалманы. Коридорҙың таҙалығына иғтибар итмәһә лә, дежурлыҡ бер-ике көнгә тотҡарланһа, оло ғауға сығарҙы.

Подъезда шылт иткән тауышҡа ла ишекте асып, кем ингәнен, сыҡҡанын тикшергән Саниянан тиҙҙән эргә-тирәһендәге бөтәһе лә биҙҙе. Ҡаршы фатирҙағы күршеһе менән хатта дошманлашыуға тиклем барып етте. Йыш ҡына ҡыҙмаса йөрөгән йәш ирҙең, йәнең ҡәҙерле булһа, башҡа ҡыҫылаһы булма, тип янауын Сания ысынға алды ла ҡуйҙы. Ингәндә лә, сыҡҡанда ла, башыма бер нәмә менән һуғып ҡуймаһын, тип шикләнде. Быға тиклем иртәнән кискә тиклем фатирының ишегенә бик һалмай ғәҙәтләнгән ҡатын көпә-көндөҙ ҙә бер нисә тороп биген тикшерҙе.

Тора-бара ҡурҡыуы бөтә булмышын биләп алды, тынғыһыҙға әйләнде. Йоҡоһо - йоҡо, ашы аш булманы. Ә иң ауыры - кемдән ярҙам һорарға белмәй аптырануы булғандыр. Туғандары менән яҡынлығы юҡ, полицияға әйтер ине, эште ҙурға ебәреүҙән ҡурҡты. Күршеһенең үлтереү менән янауы хаҡында танышына әйткәйне, уныһы утҡа кәрәсин генә һипте - һағыраҡ йөрө, йәнәһе. Яңғыҙ йәшәгән оло йәштәгеләргә һунар итеүселәр йә тегендә, йә бында осрап тора, тип шиген арттырып ебәрҙе.

Кемгә барып баш төртөргә белмәй йөрөгәндә ҡаршы йорттағы Робертты, элекке тәрбиәләнеүсеһен, иҫенә төшөрҙө. Күптән түгел генә сираттағы тапҡыр төрмәнән сыҡҡайны ул. Урамда күрешеп һөйләшеп торғайнылар. Шунда егет бала саҡта Сانияның уға һәр ваҡыт иғтибарлы булыуын, башҡа балалар араһында уны яҡлашыуын онотмауын һөйләп торҙо. Сания ҡыуанып китте: хушлашҡанда егет, йомошоң булһа, мөрәжәғәт ит, мин хәл итә алмаған мәсьәлә юҡ, тигәйне бит. Күршеһенең ҡурҡытыуы тураһында уға әйтергә була ла баһа!

Сания Роберттың бала сағын, әлбиттә, яҡшы хәтерләй. Ҡартайған өләсәһе ҡулында үҫте. Эсергә ятҡан әбейҙән ниндәй яҡшылыҡ күрһен инде. Сания малайҙы йәлләп, йыш ҡына тәмлекәстәр һатып алды. Биргән ваҡытта, ҙурайғас, мине яҡларһың, тип әйтә лә торғайны. Егет тә әбейҙең изгелеген онотмаған, күрәһең, ярҙам кәрәкһә, өндәш, тине.

Сания әбей төндө йоҡоһоҙ үткәрҙе. Түҙемһеҙлек менән яңы көн тыуыуын көттө. Уның сабырһыҙ ҡыланыуы йәштән килә. Башына ниндәй ҙә булһа уй килһә, аҙағын уйлап тормай, шуға абына-һөрөнә ынтыла. Ошо холҡо олоғайғас та ташламаны. Тороп, душта ҡойоноп сыҡты. Берәй ниәте булһа, үҙенсә шулай ғөсөлләнеп, Аллаһтан ярҙам һорарға ғәҙәтләнгән ул. Башҡа көндәрҙә иһә намаҙлығының да, тиҫбеһенең дә ҡайҙа ятҡанлығын да белмәҫкә мөмкин.

Робертты ихатала һағалап, йомошон йомошланы. Егет шул уҡ көндө Сانияның теге эсергә ятҡан күршеһен алып килеп, әбейҙән ғәфү үтендерҙе. Ҡурҡытып алғас, ҡатын йәнә подъезында башын күтәреп, элеккесә тамағының төбө менән һөйләшеп йөрөй башланы. Тәкәббер ҡыланһа, шулай итә ул, оҙағыраҡ һөйләшһә, ҡайһы берҙә хатта тамағы ҡарлығып китә. Хәҙер бына күңеле тынысланды - үс алынды, ҡон ҡайтарылды.

Ошо ваҡиғанан һуң Роберттың яйлап үҙенә эйәләшеп киткәнен һиҙмәй ҙә ҡалды ул. Бер аҙҙан егет Сانияның бөтә серен, шик-шөбһәһен, ә иң мөһиме, үлемтеккә тип йыйған аҡсаһының ҡайҙа ятҡанын белә ине инде. Көндәрҙән бер көндө йомшаҡ креслоһында ғәҙәтенсә ятҡан тапшырыуын ҡарап ултыра ине, кемдер күҙен ҡапланы. Әбей тәүҙә шаярталар икән тип уйланы, ҡыпһыуыр кеүек ҡаты бармаҡтар муйынына үрелгәнсе, бер-ике тапҡыр Роберттан ярҙам һорап ҡысҡырырға өлгөрҙө, аҙаҡ иҫен юғалтҡан... Аңына килгәндә диванда һуҙылып ята ине. Аҡ халатлы ҡыҙыҡай укол яһай, участковый ҡағыҙға нимәлер теркәй, уның янында - эскесе күршеһе.

- Тотоғоҙ бандитты, кеше үлтереүсене, - тип ҡысҡырҙы, күршеһенән ҡурҡып, әммә тауышы үҙе янынан алыҫ китмәне. Муйыны быуылған саҡта тауыш ярылары зыян күргән икән. Шулай ҙа әбейҙе ишеттеләр.

- Ул - һине үлемдән ҡотҡарыусы, үлтереүсең - ана ишек төбөндә, - тине участковый. Ынтылып ҡараһа, ике полицейскийҙың ҡамауында ҡулына бығау кейгән Роберт баҫып тора. Шаңҡыу хәлендә булһа ла әбей эштең ниҙә икәнен шунда уҡ аңланы. Уға үҙенең элекке тәрбиәләнеүсеһен яуапҡа тарттырыуҙарын һорап, ғариза яҙмай сараһы ҡалманы...

Подъезда бөтәһенең дә эшенә ҡыҫылып, сәбәпһеҙгә бәйләнеп, биҙҙереп бөткән әбейҙе күршеләре ысын күңелдән йәлләне. Ҡан баҫымы күтәрелеп, тора алмай ятҡанында "Ашығыс ярҙам" саҡырҙылар, магазиндан аҙыҡ-түлек ташынылар, алмашлап иҙәнен, керен йыуҙылар. Тамаҡ төбө менән һөйләшкән, тәкәббер, дорфа ҡатынды, суд ҡарары сыҡҡандан һуң, бөтөнләй ишетмәнеләр: быуылғандан һуң тауыш ярыһы төҙәлмәйенсә, бөтөнләй өнһөҙ ҡалды ул.

Сانияның тормошонда йәнә үҙе генә белгән тағы бер үҙгәреш булды - ҡатын Аллаһу Тәғәләгә ысынлап һыйынды. Элеккесә, нимәлер һорау, үтенеү өсөн намаҙлыҡҡа баҫмай хәҙер ул, ә рәхмәт әйтеү, шөкөр итеү өсөн сәждә ҡыла...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

*✓ Уларҙың ырыуы ҡырҡ күлгә хужа булып тора. Шунан килгән "ҡырҡ күл хужалары" тигән дандары ла бар. Улар ана шул күлдәр ерен әллә нисә быуаттар һаҡлап килә, йыр-моңдары, ауыҙ-тел ижады, тарихтары шуларға бәйле.*



*ХАҠ ТАМЫРЛЫБЫҘ*

**Өс йыл инде республикабыҙҙа "Шәжәрә" Башҡортостандың тарихи мираҫын өйрәнеү үҙәге тарафынан ижад ителгән "Башҡорт ырыуҙарының тарихы" томлыҡтары донъя күреп килә. Ошо көндәрҙә уның 19-сы томына материалдар туплау йомғаҡланып тора. Экспедициялар ваҡытында альманахтарҙы әҙерләүсе ғалимдар бикәтин, һалйот, һеңрән, терһәк һәм һырҙы ырыуҙары буйынса мәғлүмәттәр йыйыу өсөн бер нисә тапҡыр Силәбе өлкәһенең Арғаяш һәм Ҡоншаҡ райондарына барып ҡайтты. Үҙәктең ғилми хеҙмәткәре, социология фәндәре кандидаты Илгиз Солтанморатов сәйәхәт сәхифәләре менән уртаҡлаша.**

# БЫЛ ТОМЛЫҠТАР...

## тарихи аңыбыҙҙы уята




**➔ Һеҙҙең үҙәк тарихыбыҙҙы ошондай төплө һәм киң масштабта өс йыл өйрәнә, тинегеҙ. Быға тиклем был өлкәне ундай кимәлдә өйрәнеүселәр булманымы?**

-Быҕаса башҡорт тарихы башлыса Р. Кузеев тикшереүҙәре нигеҙендә генә өйрәнелде. Совет заманында билдәле сәбәптәр арҡаһында был уңайлы ла ине. Һуңынан инде был система тарҡалғас, туҡһанынсы йылдар араурығында бер демографик упҡын булып алды. Быуындар бәйләнеше, күсәгилешлек ебе өҙөлдө. Был фәндә бигерәк тә ныҡ һиҙелде. Бөгөн беҙ ошо арауыҡ юғалтыуын, шул процесс һөҙөмтәләрен бик яҡшы тойоп йәшәйбеҙ. Хәтерҙәге күп нәмәне юғалтып, онотоп, юйып өлгөргәнбеҙ. Әммә ҡан хәтере, аң хәтере тигән төшөнсәләр бар һәм беҙ тап ана шул хәтерҙәрҙе уятыу, тергеҙеү өҫтөндә эшләйбеҙ ҙә инде. Бөгөн, Аллаға шөкөр, йәш быуын ғалимдары үҫеп етте һәм улар иңендә ҙур яуаплылыҡ ята.

Мин хеҙмәт иткән "Шәжәрә" Башҡортостандың тарихи мираҫын өйрәнеү үҙәген барыбыҙға ла билдәле тарихсы-ғалим Салауат Хәмиҙуллин етәкләй һәм үҙәк башҡорт ырыуҙары тарихын тикшереп, өйрәнеп, асыҡлап, халыҡҡа еткереү бурысын үтәй.

**➔ Сираттағы томлыҡтың башҡорт ырыуҙары тарихына индергән өлөшө ни кимәлдә? Был ырыуҙар бармы ул бөгөн, әллә улар хаҡында бары тик мәғлүмәттәр генә йәшәйме?**

- Белеүегеҙсә, ун туғыҙынсы том башҡорттарҙың бәкәтин, һалйот, һеңрән, терһәк һәм һырҙы тип аталған ырыуҙары тарихын өйрәнә. Был ырыуҙар ҡасандыр көслө, күп һанлы халыҡ булһа, бөгөн юғалып барғандар иҫәбендә. Улар Силәбе өлкәһенең Ҡоншаҡ, Арғаяш райондарында йәшәй, беҙ уларҙы шул тарафтарға эҙләп барҙыҡ та инде.

Заманында "Маяҡ" атом станцияһы фағиҗәһенән һуң шул ерлектәге күп башҡорт ауылдары күсерелә, улар башҡа ауыл-ҡалаларға ҡушыла, йорт-ҡуралары, малтыуары юҡ ителә. Шул сәбәпле, тотош бәкәтин ырыуы туҙҙырылып бөтөлә. Башҡорт ырыуҙарының уларҙың һәр береһенең үҙ биләмәһе, тарихи ерлеге бар, кемдәрҙең ҡайһы территорияны биләгәнен һәм хәҙер биләүен беләбеҙ. Ә бәкәтиндәр бөтөнләй тарихи ерлекһеҙ тороп ҡалған. Шунлыҡтан, китапта уларға ҙур урын бирелде.

Ҡоншаҡ районында бәкәтин ырыуы вәкиле Ғәзиз Йомағужин исемле ағай менән таныштым. Һөнәре буйынса электрик булған ағай тарихты энәһенән-ебенә тиклем өйрәнгән, йөрәгендә рух ҡуҙы баҙырап ята. Унда шул тиклем бай тарихи база, ярҙамы бик ҙур булды, етмеш ике йәштәмен, тип тормай, беҙҙең менән йөрөп, барыһын күрһәтеп, аңлатып сыҡты, рәхмәтлебеҙ уға. Ана шул үрҙә әйтелгән күсеү, үҙгәртеү, сит өлкә булыу сәбәбенәндер инде, уның фамилияһын да "Юмауин" тип яҙып ебәргәндәр.

Ғәзиз ағай, бәкәтин ырыуы Силәбеләге иң матур урындарҙа көн иткән, тип һөйләй. Уларҙың ырыуы ҡырҡ күлгә хужа булып тора. Шунан килгән "ҡырҡ күл хужалары" тигән дандары ла бар. Улар ана шул күлдәр ерен әллә нисә быуаттар һаҡлап килә, йыр-моңдары, ауыҙ-тел ижады, тарихтары шуларға бәйле. Һәм бер көн килеп уларҙы төбө-тамырынан аҡтарып, тота ла күсерәләр. Ғәзиз ағайға ул саҡта бары ун йәш була. Уларҙы һалйоттар ырыуыныҡы булған Хәлит ауылына ултырталар. Ауылда хатта Бәкәтин исемле урам да була.

**➔ Атом станцияһы афәте был ырыуҙар халҡын күпләп юғалтыуға ла, сәләмәтлектәрен ҡаҡшатыуға ла килтергән бит инде... Ваҡытында был мәғлүмәттәр йәшерелгәндер ҙә...**

- Әлбиттә, был хаҡта халыҡ үҙе белә. Тик беҙҙең милләт үтә баҫалҡы шул. Улар ярҙам һорап, льгота, дауалау йәки башҡа ташламалар юллап йөрөмәгән һәм йөрөмәй ҙә. Мәҫәлән, шундағы бер башҡа милләт халҡы йәшәгән ауылда бөтөн ярҙам ысулдарын ҡулланып бөткәндән һуң, ауылдарын яңы урынға күсереп, йорт-ҡуралы итеүҙәрен талап иткәндәр.

Ярай әле, беҙҙең башҡорттарҙа ла һуңғы йылдарҙа тарихи аң уяна һәм бәкәтиндәр ҙә тарихи ерҙәрен кире ҡайтарып алыу артынан йөрөй башланы. "Бәйләнештә" селтәрендә был ырыу йәштәре төркөм асҡан, шул юл менән аралашалар, бер-береһе менән танышалар. Ерлектәренә барып ҡайтыусылар ундағы ҡәбер таштарын фотоға төшөрөп һала, шулайтып та эҙләйҙәр улар ата-бабаларын. Әйткәнемсә, ерҙәрен ҡайтарып алыу мәсьәләһендә улар ҡоро хәбәр һөйләп кенә түгел, ә етди, документаль рәүештә рөхсәттәр юллап, элекке ауылдары урынында коттедж ҡасабалары төҙөү уйы менән яналар.

Беҙҙең экспедицияны Силәбе башҡорттары ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡаршы алды. Сөнки улар үҙҙәрен үҙҙәре өсөн аса. Ундағы халыҡ ырыу төшөнсәһен артыҡ белмәй. Шул белмәү арҡаһында ниндәй ырыуға булһа ла яҙылырға әҙер торалар. Мәҫәлән, берәйһенән "Һин ниндәй ырыуҙан? Һалйотмо, бәкәтәнме?" тиһәң, "Әллә, һалйот булһын һуң", - тип әйтергә лә мөмкиндәр. Һалйоттар унда иң ҙур ырыу. Терһәктәр өс-дүрт ауыл йыйнаҡ ҡына йәшәп яталар. Һеңрәндәр күп булмаһалар ҙа (Илеш районында йәшәйҙәр, Ырымбур өлкәһендә ике ауыл бар) бик ныҡ таралып киткәндәр. Шулай ҙа, һаҡланыр өсөндөр, ҡайҙа ла йәшәгән урындарындағы атамаларға "һеңрән" исемен таҡҡандар. Мәҫәлән, Һеңрән Ҡары, Һеңрән Ҡумкүле. Әйткәндәй, Күмкүл ауылын саҡ таптым, ул заманында ауылдарҙы эреләтеү йылдарында икенсе ауылға ҡушылып йотолған булған икән. Халыҡ уларҙың һеңрәнлеген белә, тик ырыу икәнлектәрен онотҡан.

Һырҙы ырыуынан Аяҙғолда, Ҡорман ауылдарында булдым. Ул ырыуҙың Булат Теләкберҙин тигән данлы улы туҡһанынсы йылдарҙа Башҡортостанда Юғары суд рәйесе була.

Тикшереүҙәр барышында ҡыҙыҡлы һөйләштәр, диалекттар менән танышылды. Һалйоттарҙың бер өлөшө иң төньяҡта, Свердловск өлкәһе менән сиктә йәшәгән. Иң ҡыҙығы, урамда килеп осраған кешенең ихласлығы, ябай алсаҡлығы уның башҡорт булыуын белдерә лә ҡуя. Беҙҙе урамда бер апай күреп ҡалып, һөйләшеп, ай-вайға ҡуймай өйөнә алып ҡайтып китте. "Ҡунаҡ итә алмаһам да, үҙ башҡорттарыма әүәлмә ашатып булһа ла сығарам", - ти. Беҙ әүәлмәнең ни икәнен белмәйбеҙ, әлбиттә, ҡыҙыҡһынабыҙ. "Был беҙҙең яҡта башҡорттоң иң нейе", - тине апай, шунан ун-ун биш минуттай һары майҙы табала ҡайнатып, өҫтөнә он һибеп, суфле кеүек нәмә әҙерләне. Был массаны икмәккә һылап ашайһың икән. "Беҙҙә ҡунаҡты һарыҡ һуйып, мунса яғып, әүәлмә бешереп хөрмәтләйҙәр. Ошоно ашаһағыҙ, кискә тиклем асыҡмаҫһығыҙ", - тип ҡалды. Әүәлмәнән һарҡытылған һары майҙы күтәреп эсеп тә ҡуйырға тейеш инек тә, уныһын булдыра алманыҡ. Ата-бабаларыбыҙ ниндәй ныҡ, сәләмәт булған икән, тип уйланыҡ был һыйҙан һуң.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА яҙып алды.**
**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

Жәлил Кейекбаев "башҡорт" этнонимы "баш уғыр"ҙан "башғур", "башҡур", "башҡорт" үҙгәреш кисереп барлыҡҡа килгән тип иҫәпләй. Ғалим бында башҡорттарҙың боронғо ата-бабалары уғырҙар булыуын күҙ уңында тота. Хәҙерге тарихсылар X быуат башынан алып Башҡорт хан етәкселегендәге күп кенә ырыуҙар һәм ҡәбиләләр берлеге хаҡында күп кенә сығанаҡтар булыуға ҡарамаҫтан, башҡорт халҡының тарихындағы Башҡорт хан һәм Болғар дәүеренә бик һаҡ ҡарай. Башҡорт халҡының боронғо дәүерҙәрҙән алып көнитмешен өйрәнгән саҡта беҙ күп һанлы ырыу, ҡәбилә атамаларына барып сығабыҙ, әммә уларҙың күбеһе дөйөм иғтибарҙан ситтә ҡала. Бөйөк Башҡорт иленең үҙәге һаналған "Тарихи Башҡортостан" башҡорт халҡы тарихын өйрәнеү фәненең айырылғыһыҙ бер өлөшө булып тора. Шул уҡ ваҡытта Евразияның ҙур ғына территорияһында үҙ ерҙәрендә йәшәгән "Башҡорт" берлегенең ҡандаш ҡәбиләләре һаналған күп кенә уғыр ҡәбиләләре тарихсыларҙың иғтибарынан ситтә ҡала, улар башҡа халыҡтарҙың өлөшө итеп күрһәтелә.

Академик Нияз Мәжитов XII быуаттың яҙма тарихи сығанаҡтарына таянып, "Башҡорт иле"нә көньяҡтан 5-6 эре ырыуҙар һәм ҡәбиләләр килеп ҡушылыуы хаҡында яҙа. Уның фекеренсә, был ҡәбиләләр араһында Бахмутов мәҙәниәтенә ҡараған ҡәбиләләр иң күбеһен тәшкил иткән, улар көнбайыш Урал алды территорияһын тотошлайы менән тиерлек биләгән. Уғыр ҡәбиләләре Башҡорт хан биләмәһенең үҙәген тәшкил иткән. Башҡорт хан ҡәбиләләре үҙҙәренең ырыу-ҡәбилә атамаһына башҡорт һүҙен ҡушып әйтә башлаған. Әйтәйек, "башҡорт ҡәбиләһе табын", "башҡорт ырыуы бөрйән" һ.б.

Күп һандағы уғыр-башҡорт ырыуҙарының һәм ҡәбиләләренең бер ҡор булып тупланыуы һөҙөмтәһендә "Бөйөк Башҡорт иле" барлыҡҡа килгән дә инде."Уғыр" (үгер, югур, уғыр һ.б.) һүҙе боронғо замандарҙа "грамоталы кеше" мәғәнәһендә йөрөгән. Бихши Иман яҙып ҡалдырыуынса, Булымер Караджарский (Владимир Святославович Черниговский) үҙен "уғыр" тип атар булған, етмәһә, был исемде ул бик ныҡ яратҡан. Башҡорт хандың ырыуҙар берлегенә инмәгән башҡа аҙ һанлы уғыр ҡәбиләләре (төньяҡ Урал аръяғы, көнбайыш Себер һ. б.) үҙҙәренең ырыу атамаларын һаҡлап ҡалған (ханттар, мансилар, якуттар һ.б.) Улар - башҡорттарға ҡандаш уғыр ҡәбиләләре элек төрки телле уғыр ҡәбиләләре сафында булған. Тарих ағышы шуны күрһәтә: үҙҙәрен "башҡорт" тип атай башлаған ҡәбиләләр ниндәйҙер кимәлдә уғыр ырыуҙарынан һәм ҡәбиләләренән айырылған, бының менән уғыр халҡының бөтөнлөгө емерелгән. Хәрби юлбашсы Башҡорттоң исемен халыҡ исеме итеп ҡабул итеү һәм был процестың тарала барыуы Тубыл һәм Ишем ерҙәрендә йәшәүсе уғыр ҡәбиләләренә лә килеп еткән, хатта Иртыш өҫкө ҡушылдығы булған ике йылғаға ла уның исеме бирелгән: Оло һәм Кесе Башкурка (Большая, Малая Башкурка) йылғалары. Барлыҡ уғыр ҡәбиләләренең дә Башҡорт исемен алырға теләмәүен дә иҫәпкә алырға кәрәк. Мәҫәлән, Урал алды территорияһында йәшәүсе Бөйөк Башҡорт иле составындағы уғыр ҡәбиләләре.

**(Дауамы бар).**

> ✓ *Ә бит өйрәтеүҙең башҡа ысулдары ла бар. Башта үҙеңде тәрбиәләргә кәрәк, балалар бит һиңә оҡшарға тырыша. "Балаңды тәрбиәләмә, үҙеңде тәрбиәлә, балаң барыбер үҙеңә оҡшаясаҡ", тип әйтелә бит инглиз мәҡәлендә.*

# БАЛАЛАРЫБЫҘҘА үҙебеҙҙе яратабыҙ

**Башҡортостандың халыҡ артисы Әхтәм Абушахманов менән әңгәмәләш булыусылар уның бер сифатына иғтибар итмәй ҡалмайҙыр: барыһына ла ярарға тырышмай, дежур һүҙ һөйләй белмәй ул. Һәр әңгәмәһендә йә булмаһа халыҡ алдында яһаған сығышында ниндәйҙер парадоксаль фекер әйтеп ысҡындыра, көтөлмәгән дәлиле менән тыңлаусыларҙы һиҫкәндереп, ғәжәпләндереп тә ҡуя. Ҡайһы ваҡыт уның әйткәндәре менән килешмәйенсә, үҙенә дәғүә белдереүселәр ҙә табылмай тормайҙыр, нисек кенә булмаһын, ситуацияға яраҡлашырға, номенклатураға оҡшарға тырышмай һәм холҡоноң шул яғы менән бөтәндәрҙе ылыҡтыра ла ул. Ә бына улдары - М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры режиссеры Айрат, Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры бейеүсеһе Ринат менән ҡорған әңгәмәһендә инде Әхтәм Әхәт улының беҙ белмәгән тағы ла бик ҡыҙыҡлы яҡтары асыла. Әңгәмәлә, билдәле, яҙылмаған ҡанундар буйынса атай кеше күберәк һөйләне, улдары теге йәки был өлкә буйынса күтәрелгән мәсьәләгә ҡарата үҙҙәренең мөнәсәбәтен белдерҙе.**

**▸ Һөйләшеүҙе бер япон риүәйәте менән башлағы килә. Аталарына күпмелер йәш тулғас, ике улы уны арҡаларына йөкмәп, тауға алып китә. Йола буйынса, улар аталарын шунда үлергә тип ҡалдырып китергә тейеш була. Бына улар юлға сыға. Уғландар ҡәҙерле кешеһенә һуңғы хөрмәт күрһәтеп, уны алмаш-тилмәш күтәрә. Урман-ҡаялар аша байтаҡ ҡына юл үтәләр. Аталары иһә улдарына һиҙҙермәй генә осраған ағастарҙың ботаҡтарын һындырып, юлға ташлап бара. Тауға менеп еткәс, улар аталары менән илаша-илаша хушлашып, үҙҙәре менән алған ризыҡты, һыуҙы уға ҡалдырып, ҡайтыр юлға сыға. Уғландар урау-урау юлды үҙһенмәй, шырлыҡ аша тураға тартып ҡайтырға ниәтләй. Әммә шырлыҡҡа инеүҙәре була, аҙашалар. Өс тәүлек буйына асығып-сарсап, шырлыҡ ҡыҙырып ҡаңғырып йөрөп, аталары янына кире килеп сығалар. Уныһы үҙен нисек ҡалдырып киткән булһалар, ризыҡты һәм һыуҙы семтем дә ҡабул итмәйенсә, олуғ донъяға һоҡланып ултыра икән. Уғландар ашап-эсеп алғас:**

**- Атай, беҙгә ҡайтыр юлды өйрәт, - тип үтенә.**

**- Бына ошо йүнәлеш буйлап барһығыҙ, йөҙ аҙым һайын ерҙә ботаҡ ятыр, шул һеҙҙең ҡайтыр юлығыҙ булыр, - ти аталары.**

**Был һүҙҙе ишеткәс, уғландары ҡысҡырып илап ебәрә. Беренсенән, ҡайтыр юл табылыу шатлығынан, икенсенән, үҙҙәре үк үлергә алып барған аталарының улдары хаҡында хәстәрләүен аңлап, ғәрләнеүҙән, намыҫланыуҙан үкһей улар. Артабан уғландар аталарын тағы ла алмаш-тилмәш елкәләренә атландырып, ергә ташланған ағас ботаҡтарын һанай-һанай, ҡайтыр яҡҡа юллана...**

**Был хәл беҙҙең халыҡтың әхлағына, йолаһына бөтөнләй тап килмәй, әлбиттә. Ҡот осҡос йола булған ул заманда японДарҙа. Әммә риүәйәттә шундай фекер ҙә әйтелә: аҙашҡан ваҡытта ҡайтырға юл кәрәк булған һымаҡ, кешегә һәр ваҡыт атай кәрәк. Шулай түгелме?**

**Әхтәм Әхәт улы:** Эйе, кеше ғүмере буйына атайға мохтаж. Мин үҙем һәр ваҡыт атайымды һағынам. Ул өйөбөҙҙөң мөйөшөндә генә ултырып, аҡыл өйрәтмәйенсә, мине генә тыңлап ултырһа ла бәхетле булыр, уға ғына һөйләй ала торған һүҙҙәремде еткерер инем. Атайым миңә хатта ярҙам да итә алмауы мөмкин. Шулай ҙа күңелемде тулыһынса бушатырлыҡ кеше - ул атайым ине. Ул 69 йәшендә үлеп китте, оҙаҡламай миңә лә 69 йәш тула. Уның менән туйғансы һөйләшеп ултырып булманы. Әгәр ҙә был мөмкин булһа, уның менән һөйләшер өсөн үҙен әллә ҡайҙарҙан йөкмәп алып ҡайтыр инем.

Ҡайһы берәүҙәр ҡырҡ йәшенә тиклем атаһына: "Һин бер нәмәне лә белмәйһең, бына мин барыһын да беләм", - тип әйтеүсән. Ҡырҡтан һуң: "Атай, һин дә әҙерәк беләһең икән", - тип әйтә башлайҙар ҙа, илленән һуң атаһын ғына тыңлай башлайҙар. Был һәр ваҡыт шулай булған, шулай буласаҡ. Әлбиттә, беҙ, хәҙерге заман атайҙары, күп йәһәттән үҙ улдарыбыҙҙан артта ҡалғанбыҙ, әммә тормош тәжрибәһе, тормош фәлсәфәһе буйынса уларҙан күберәкте беләбеҙ.

**▸ Беҙ атайҙар-улдар мөнәсәбәтенең классик формаһын дөрөҫ итеп күҙ алдына килтерәбеҙ, йәғни атайҙар улдарын тәрбиәләй, уларға йоғонто яһай. Әммә бындай мөнәсәбәттең нәҡ киреһен сағылдырған хәлдәр ҙә бар. Мәҫәлән, бер ул кеше атаһының һүҙҙәрен, кәңәштәрен тотмайынса, йәғни уның тәрбиәһен алмайынса, боҙоҡ юлдан китеп, төрмәгә барып эләккән. Ул егет төрмәлә дингә килгән, намаҙ уҡый башлаған. Иреккә сыҡҡас, атаһына йоғонто яһап, уны ла намаҙға баҫтырған. Бынан нимә килеп сыға: уғландың атаһын тыңламауы, тәрбиәһеҙлеге уны төрмәгә алып килгән, ә төрмәнән ул атаһы өсөн динде алып сыҡҡан. Бик парадоксаль был күренешкә ниндәй комментарий бирер инегеҙ?**

**Әхтәм Әхәт улы:** Төрмәгә эләгеп, унан тәртипкә ултырып, намаҙға баҫып сығыусылар хаҡында мин дә ишеткәнем бар. Әгәр ҙә улар өсөн был файҙаға булған икән, быны хупларға ғына кәрәк. Ә атай кешенең үҙ улына бирмәгән тәрбиәһе, йәғни улының тәрбиәһеҙлеге һуңғы сиратта уның үҙен тәрбиәләй тигән фекергә килгәндә, бында шундай ҙа һығымта яһарға мөмкин бит: көн дә бер үк нәмәне балаға тылҡыу, уны нимәгәлер көсләп өйрәтергә тырышыу кире һөҙөмтә лә биреүе бар бит. Бәлки, бында ла шул уҡ күренештер, кем белә? Үҫмер, егет саҡта балалар күп осраҡта ата-әсә әйткәндең, өйрәткәндең тап киреһен эшләй. Ә бит өйрәтеүҙең башҡа ысулдары ла бар. Миненсә, башта үҙеңде тәрбиәләргә кәрәк, балалар бит һиңә оҡшарға тырыша. "Балаңды тәрбиәләмә, үҙеңде тәрбиәлә, балаң барыбер үҙеңә оҡшаясаҡ", тип әйтелә бит инглиз мәҡәлендә.

**▸ Ысын тәрбиәсе тәрбиәләнеү объектынан үҙе тәрбиә ала, тиҙәр. Һеҙ үҙегеҙ улдарығыҙҙан ниндәй тәрбиә алаһығыҙ?**

**Әхтәм Әхәт улы:** Ижади яҡтан тәрбиә бирә улар. Мин хәҙер балет хаҡында ла күп кенә нәмә беләм. Элек миңә ул бик алыҫ торған сәнғәт төрө ине. Айраттың спектаклдәрен ҡарайым да, ҡыуанып ҡуям. Ул хәҙерге заман психологияһын бик яҡшы белә. Мин бөтөнләй иғтибар итмәгән нәмәләрҙе тотоп ала белә. Уларҙың эш алымдары беҙ үҫкән заманға бөтөнләй тура килмәй. Бөгөн бөтөнләй икенсе алымдар менән эш итергә кәрәк икән, тигән уй килә лә, ижад мәсьәләһендә бөтөнләй икенсе төрлө уйлай башлайым.

**▸ Айрат, Ринат, атайығыҙ Әхтәм Әхәт улы республикабыҙҙа ныҡ танылған халыҡ артисы. Ул хәҡиҡәтте, ысынбарлыҡты нисек бар, шулай итеп, туранан-тура әйтә торған кеше. Уның ауыҙынан бик ҡыйыу фекерҙәр ҙә ишетергә тура килә. Уға үпкәләп йөрөүселәр ҙә байтаҡ ҡына. Сөнки тураһын әйткән хатта туғанына ла ярамаған, тиҙәр. Ундай кешенән ҡурҡалар ҙа, хөрмәт тә итәләр, яратып та бөтмәйҙәр. Әхтәм ағай ниндәй атай ул?**

**Ринат:** Ысынлап та, атайыбыҙ тураһын ярып һөйләргә ярата. Ҡайһы саҡта беҙҙе тәрбиәләү йә беҙҙе оялтыу маҡсатынан ниндәйҙер тарихты үҙе уйлап сығара, ул бит ижад кешеһе, китаптар ҙа яҙа. Нисек кенә булмаһын, атайыбыҙҙың беҙҙе оялтырға, башҡаларға һабаҡ бирергә ынтылышы һәр ваҡыт уңышлы килеп сыға былай.

**Айрат:** Дөрөҫлөктө, тәнҡитте ҡабул итеүе һәр ваҡыт ҡыйын инде ул. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, кемдер, бигерәк тә атай кеше улдарына хәҡиҡәтте әйтергә тейеш ул. Мин, режиссер булараҡ, үҙем ҡуйған спектаклдәр тураһында ҡаты тәнҡит мәҡәләләрен дә уҡығаным булды. Мин сыныҡҡанмын, уларҙы тыныс ҡабул итә алам хәҙер. Әгәр ҙә тәнҡит аҫтында өмөт булһа, ул иң кәрәкле тәнҡит тип иҫәпләйем.

Ә тормошта атайымдың тура һүҙле булыуына бәйле абруйы миңә үрнәк һымаҡ. Мәҫәлән, миңә лә үҙ эшемдә күп кенә кешеләр: "Бына Айрат әйтһә, әйтә лә ҡуя ул", - тигәне бар. Күрәһең, атайымдың шундай сифаттары миңә лә күсәлер. Башҡорт театрҙарында эшләүсе күп кенә актерҙарҙың ата-әсәләре ауылда йәшәй. Уларҙың күбеһе ауылдарҙан килеп, сәнғәт юлына баҫҡан. Улар миңә: "Атайың әртис булғас, һиңә барыһы ла еңел..." - тип әйтә торғайны. Ысынында иһә, бөтөнләй улай түгел. Киреһенсә, миңә һәр ваҡыт башҡаларға үҙемдең үҙем булыуымды, йәки Әхтәм Абушахмановтың күсермәһе түгеллегемде иҫбат итергә тура килә. Мәҫәлән, мин ауылдан килеп нимәлер эшләһәм, был эш миңә ҙур плюс булыр ине. Ә былай: "Һин тағы ла яҡшыраҡ, күберәк эшләй алаһың, шул-шул кешенең улы була тороп..." - тип ҡарайҙар. Миңә үҙемдең карма буйынса ла талаптарға яуап бирергә, атайым өсөн дә эшләргә тура килә. Икенсе бурыс күпкә ауырыраҡ.

**▸ Ә бит "халыҡтар атаһы" Сталин "Улдар атайҙары өсөн яуап бирмәй", тип әйткән...**

**Әхтәм Әхәт улы:** Идеалда ул шулай, әммә тормошта хәлдәр башҡасараҡ. Мәҫәлән, ҡайһы берәүҙәр һәр ваҡыт нимәнелер күберәк эләктереп ҡалырға тырыша. Был осраҡта вазифа биләүсе атай кеше күберәк алырға тырышҡандың өлөшөн киҫә. Ә инде өлөштәре киҫелеп ҡалыусылар вазифа биләгән атайға йоғона алмағас, уның үсен балаларынан ала башлай. Был йәһәттән минең принципиаль булыуымдың һөҙөмтәһен улдарым ныҡ татыны. Улар был осраҡта үҙҙәренең эше менән генә үҙ-үҙҙәрен иҫбат итеп, еңеп сыға ала. Ижад, ғөмүмән, эгоизмға ҡоролған, ижад кешеһе эгоист булмаһа, яҡшы әҫәрҙәр, спектаклдәр, ролдәр тыуҙыра алмай.

**▸ Һуңғы ваҡытта тик ирҙәр генә бирә ала торған тәрбиәне лә ҡатын-ҡыҙҙар башҡара. Был иң беренсе нәүбәттә мәктәп системаһына ҡағыла. Шулай түгелме?**

**Ринат:** Беҙҙең хореография училищеһында ир-егет бейеүселәрҙе ҡатын-ҡыҙҙар уҡытып сығара. Шунын һөҙөмтәһендә тамашасы беҙҙән: "Нишләп һеҙҙең сәхнәлә ирҙәр юҡ?" - тигән һорау бирә.

**Айрат:** Беҙҙең илдә, бәлки, донъяла ла Атайҙар институты юҡҡа сығыу өҫтөндә. Атайҙар культы, айырым ғаиләләрҙе генә иҫәпкә алмағанда, бөтөнләй юҡ тиерлек. Миненсә, был хәл ир менән ҡатын араһындағы ҡапма-ҡаршылыҡтан килеп сығалыр: ир кеше ҡатынының үҙен ихтирам итмәүенә зарлана, ҡатыны иһә уны юлыҡһыҙ тип иҫәпләй. Ошо пьеса балаларҙың күҙ алдында бара. Йыш ҡына ҡатын балаларының атаһын һәм үҙенең ирен кеше алдында кәмләп һөйләй. Әсә кеше был осраҡта иң ҙур зыяндың балаларына килере хаҡында уйлап та бирмәй. Был йәһәттән мин бәхетле: минең ике ҡыҙым һәм уларҙың ике әсәһе бар. Ҡыҙҙарымдың миңә ихтирам менән ҡарауы әсәләренең йоғонтоһонан, тип уйлайым.

**▸ Айрат, Ринат, беҙ бер ваҡытта ла атайҙарыбыҙ һымаҡ булдыра алмайбыҙ. Шул уҡ ваҡытта атайҙар һәр ваҡыт беҙҙең үҙҙәренән яҡшыраҡ булыуыбыҙҙы, күберәккә өлгәшеүебеҙҙе теләй. Был дөрөҫмө?**

**Айрат:** Кешеләр төрлө булған һымаҡ, уларҙың юлдары ла төрлө-төрлө инде. Яңыраҡ ҡайҙалыр бер психолохтың яҙмаларын уҡығайным. Уның яҙыуынса, атайҙарҙа балаларына ҡарата мөхәббәт түгел, ә күберәк инстинкт була. Баҡтиһәң, кеше балаларҙы үҙенә алмаш өсөн генә тыуҙыра. Әгәр ҙә кеше үлмәйенсә, мәңге йәшәһә, уға балалар тыуҙырыу ҙа кәрәк булмаҫ ине. Бала кешегә мәңгелек ғүмер иллюзияһын тулыландырыу өсөн генә кәрәк. Беҙ балаларыбыҙҙы тәрбиәләгәндә үҙебеҙҙә бойомға ашыра алмағанға өлгәшергә теләйбеҙ. Беҙ балаларыбыҙҙа баланы түгел, үҙебеҙҙе яратабыҙ. Шуға күрә, беҙгә тормошта нимә етмәй ҡалһа, шуның мотлаҡ рәүештә балаларыбыҙ тарафынан тормошҡа ашырылыуына ынтылабыҙ. Ҡайһы бер ата-әсәләр ошо ынтылышта ҡатып ҡалһалар, балаларының үҙаллылығын сикләйҙәр. Улар балаларын үҙҙәренсә йәшәтергә тырышалар, һөҙөмтәлә бала үҙ тормошон йәшәмәй, ә атай-әсәйҙең тормошҡа ашмаған хыялдарын бойомға ашырырға тырышып йәшәй. Был бик ҡатмарлы фән.

Польшала Люпа тигән бер режиссер биш йыл буйы режиссерҙар әҙерләй. Уҡыуҙы тамамлар алдынан тегеләр диплом спектакле ҡуйырға тейеш бит инде. Шунда уҡытыусы студенттарына шундай шарт ҡуя: спектакль башланыр алдынан улар мотлаҡ рәүештә сәхнәгә табут сығарырға тейеш була. Табутта "Люпа" тип яҙылған. Бында шундай мәғәнә һалынған: һин биш йыл үткәс, уҡып сыҡҡас, уҡытыусыңды ерләргә тейешһең. Шулай итмәһәң, һин ғүмерең буйына уҡытыусыңдың хыялдарын тормошҡа ашырырға тейеш булаһың. Ул сағында үҙ юлың булмаясаҡ...

**▸ Фәйләсүф Ошо ла үҙенең яҙмаларында ата-әсәләрҙең балалары, балаларҙың ата-әсәләре алдында бер ниндәй ҙә бурысы булмауы хаҡында яҙа.**

**Айрат:** Ошо тағы ла: "Балаларығыҙҙы яратығыҙ һәм ихтирам

*✓ Атай-әсәйҙе ҡайҙандыр алыҫтаныраҡ яратып йәшәргә кәрәк. Шул осраҡта ғына бала үҙ юлы менән китә алалыр. Әгәр ҙә инде уларҙың янында ҡалһаң, ғүмерҙәрен дә дауам итәһең инде. Бындай осраҡта үҙ тормошоң, үҫешең булмауы бар.*

# БАЛАНЫ ТҮГЕЛ...

## шул инде беҙ

итегеҙ", - тип яҙһа, беҙ, киреһенсә, балаларыбыҙҙан үҙебеҙҙе ихтирам итеүҙе талап итәбеҙ. Шунан һуң ул тағы ла: "Нишләп ялған, уҫал ҡарттарҙы яратырға тейешһегеҙ әле?"- тигән һығымтаға килә.

**Ринат:** Тормошондоң ҡайһылыр мәлендә атай-әсәйҙән китергә кәрәктер, минеңсә. Атай-әсәйҙе ҡайҙандыр алыҫтаныраҡ яратып йәшәргә кәрәк. Тик шул осраҡта ғына бала үҙ юлы менән китә алалыр. Әгәр ҙә инде уларҙың янында ҡалһаң, ғүмерҙәрен дә дауам итәһең инде. Бындай осраҡта үҙ тормошоң, үҫешең булмауы бар. Күпмелер ваҡыт үткәс инде ата-әсәһе янында йәшәгән баланың психологияһы боҙолған булыуы мөмкин. Был осраҡта шәхес тигән төшөнсә лә булмаясаҡ. Ә шәхес булмаһа, кеше лә юҡ тигән һүҙ. Иң ҡыҙығы шунда: ул ата-әсәһенең күсермәһе лә булмауы мөмкин. Мин ундай кешеләрҙе күргәнем бар. Улар ата-әсәһенең күсермәһе лә, үҙҙәре лә була алмайынса, эскелеккә бирелеп китәләр. Сөнки уларҙың, ысынында, үҙҙәре юҡ.

**Айрат:** Бала өсөн иң ҡурҡыныс уйын - уны күрмәмешкә һалышып, "Һин ҡайҙа?" тип эҙләп ҡыланыу. Ул саҡта бала: "Бына бит мин", - тип үҙенең барлығын иҫбатларға тырыша. Бала кескәй сағынан алып ата-әсәһенең баһаһы аша үҙенең барлығын иҫбатларға тейеш, беҙ иһә уны күрмәмеш булып, психикаһын ғына боҙабыҙ. Бала үҙенең ҡулдарын күрә һәм уны ата-әсәһе күрмәһә, үҙен дә юҡмын, тип иҫәпләй. Ата-әсәләр ҡунаҡтар килгән саҡта балаһына иғтибар итмәй башлаһа, бала үҙе килеп иғтибар талап итә башлай. Шул саҡта балаға иғтибар итмәһәң, уның күңеленә ҡурҡыу тойғоһо инеп ултыра, ул хатта үҙен юҡҡа сыҡҡан итеп тоя башлай. Нулгә әйләнеү балаға үлем менән бәрәбәр икән, баҡтиһәң. Шул саҡ бала яңылыштан ғына сынаяҡ төшөрөп вата һәм ата-әсә уны әрләһә, быны бала ыңғай ҡабул итә. Бала сағында ата-әсәһе балаһын күберәк иғтибарһыҙ ҡалдырһа, был хәл уның аң төбөндә ҡала һәм ул үҫеп еткәс, ҡатыны, башҡа ғаилә ағзаларынан да шундай уҡ иғтибарһыҙлыҡ тойһа, эскегә бирелә һәм ошо юл менән булһа ла үҙенә иғтибар иттергеһе килә.

**▸ Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты рәйесенең беренсе урынбаҫары Айнур Арыҫланов, Айрат, һин килтергән дәлилде тағы ла бер етди проблема менән бәйләп, шулай тине: "...Ғаиләлә төплө тәрбиә нигеҙе һалынмағандар ана шундай секталарға инеп китә. Тағы ла мин бер нәмәгә иғтибар иттем: өйөндә кем атаһы менән конфликтта йәшәгән һәм йәшәй, кем атаһы менән уртаҡ тел тапмай, шулар секталарға китә. Ундайҙар үҫеп еткәс, власты, дәүләтте атаһы итеп күрә. Шуға күрә улар атаһына протест белдерер өсөн һаҡал ебәрә, үсеккән үгеҙ, күркә кеүек ҡылана..." ("Иленде, телеңде, ереңде һаҡлау Аллаһы Тәғәләнең аманаты", 39-сы һан, 24-30 сентябрь).**

**Ринат:** Япондар шундай тәжрибә үткәргән. Өс сынаяҡҡа дөгө һалып, өҫтөнә һыу ҡойғандар. Бер сынаяҡҡа гел яҡшы, яғымлы һүҙҙәр әйтеп торғандар, икенсеһенә, киреһенсә, әр һүҙҙәре, негатив тойғо белдергәндәр, өсөнсө сынаяҡты бөтөнләй иғтибарһыҙ ҡалдырғандар. Бер айҙан һуң тәүге сынаяҡтағы дөгөнөң шыта башлағанын күргәндәр. Икенсе сынаяҡтағы дөгө ҡарайып сыҡҡан, әммә уны ҡараһынан таҙартһалар, тере икәнлеге асыҡланған, уны киренән шыттыра башларға мөмкин булған. Ә бына өсөнсө сынаяҡтағы дөгөнөң сереүенә шаһит булғандар. Ошондай уҡ мөнәсәбәтте бала тәрбиәләүгә лә тиңләп ҡарағанда, әпәүләп-бәпләп, әрләп-тәнҡитләп тәрбиәләгән баланан шәхес килеп сығыуы, ә бына бөтөнләй иғтибарһыҙ ҡалдырылған баланың юҡҡа сығыуы асыҡланған.

**▸ Бала саҡтарында улдарығыҙҙың кем булырын теләгәйнегеҙ, Әхтәм ағай? Сабый саҡтарынан кемеһе нимәгә һәләтле булды?**

**Әхтәм Әхәт улы:** Айраттың бер ҙә театр донъяһына килеүен теләмәгәйнем. Тарихты яҡшы белгәс, тарихсы булыр йә медик булып китер хыялланғайным. Атайҙар үҙҙәре бойомға ашыра алмағанға улдары өлгәшеүен теләй, тигән баяғы формула буйынса мин үҙем дә тарихсы булырға хыялланғайным. Әммә Айрат беҙҙән ҡасып барып, сәнғәт юлы буйынса уҡыу йортона инеп китте. Айрат шул тиклем нескә тойғоло, ул мал һуйған ерҙән ҡаса, уларҙы йәлләй. Шуға күрә ул бер нисек тә табип була алмаҫ, укол да ҡаҙай, операция ла яһай алмаҫ ине. Ринатты балет буйынса уҡырға биреү идеяһы әсәһендә тыуҙы. Биксуринға алып барып күрһәткәйнек, малайығыҙ балет буйынса китә ала, инеп ҡарағыҙ, тине. Мин барыбер уны балет мәктәбенә бирергә йәлләнем. Ауыр һөнәр икәнен белә инем. Улар эшләй башлағас, 15 йылдан пенсияға сығалар. Әммә уларҙың күбеһе 15 йыл бейей алмай. Ҡайһыһы зәғифләнә. Аллаға шөкөр, бына Ринат пенсияға сыҡты инде. Уҡып йөрөгәнендә арып-талып килеп инә лә, һөйәлеп тора. Шунан унан: "Арыныңмы, улым?"- тип һораһам, илап ебәрә торғайны.

Атайҙар улдарын тәрбиәләгәндә һәр ваҡыт уларҙың кеше булырына өмөт итә. Был - тәбиғи. Әммә улдар һәр ваҡыт барыһын да үҙенсә эшләй. Был да - тәбиғи. Атайым да әле быныһы, әле тегенеһе менән һөйләшеп: "Өйрәт инде минең малайҙы пилорамға", - тип минән урмансы яһарға тырышты. Бер мәл мине ул бухгалтерға уҡытып маташты. Вәхитов тигән судья дуҫы бар ине. Шул дуҫы бер саҡ һөйләшеп ултырғандарында атайыма: "Әхәт ағай, радио һатып ал әле. Мынау малайҙарың радио тыңлап үҫһендәр әле", - тип әйткәне иҫемдә. Әммә атайым радио ала алманы, иҫке әйбер тапшырып, радионы үҙем һатып алдым. Атайым мине партияға инергә, тегендә-бында уҡырға инергә өндәне, әммә яҙмыш мине бөтөнләй икенсе юлдан алды ла китте. Әммә ул ысынбарлыҡта мин ниндәй уңыштарға өлгәшкәнде күреп өлгөрмәне.

**▸ Ринат миңә балетты аңларға ярҙам итте, тинегеҙ...**

**Әхтәм Әхәт улы:** Бер саҡ премьеранан һуң Ринатты ҡотларға тип инеп ҡосаҡлап алғайным, лыҡа һыу был. "Костюмың лыҡа һыу бит", тиһәм, ул: "Э-э-й, атай, дүртенсе костюм лыҡа һыу бит инде", - тип яуап бирҙе. Ошо хәлгә генә ҡарап та балеттың ни тиклем ауыр сәнғәт төрө икәнен төҫмөрләйһең. Балет бит ул шундай сәнғәт төрө - унда кеше тәне менән йырлай. Ринат мин балетты бөтөнләй аңламай тип уйлаған башта. Әммә бер мәл әсәһе менән "Байыҡ" тапшырыуын ҡарап ултырғанда: "Дә, атай оҙаҡламай беҙҙең балетты ла тикшерә башлар инде", - тигән. Ул саҡта мин "Байыҡ"та жюриҙа ултыра инем. Бер мәл уның премьераһы булғас, мин байтаҡ ҡына үҙ фекеремде белдермәй йөрөнөм. Ринат йөрөп-йөрөнө лә: "Атай, нишләп премьера буйынса үҙ фекереңде әйтмәйһең ул?"- тине. Мин уға юрый, сәмләндерер өсөн: "Мәскәүҙәге балетты ҡарағанда музыка тауышы балет башҡарыусыларҙың тәненән, хәрәкәттәренән яңғырап ишетелә кеүек ине, ниңәлер һеҙҙең спектаклдә музыка динамиктан ишетелә", - тигәйнем, ул ныҡ аптыранды ла: "Беҙҙең менталитет ул кимәлгә тиклем үҫеп етмәгән әле", - тигән булды. Нисек кенә булмаһын, мин уға, һин шулай итеп бейе, балетты бына былай итеп ҡуй, тип өйрәтә алмайым.

**▸ Һәр хәлдә, Айратҡа өйрәтә алаһығыҙ бит, ул һеҙ йәшәгән сәнғәт донъяһында йәшәгәс...**

**Әхтәм Әхәт улы:** Хатта уға ла өйрәтә алмайым. Ҡайһы ваҡыт шикләнгән фекерҙәремде генә әйтеп, нимәнелер аныҡлай ғына алам.

**▸ Мәҫәлән, Айрат Мостай Кәримдең "Ай тотолған төндә"һен бөтөнләй икенсе төрлө итеп ҡуйҙы, акцентты икенсе урынға ҡуйып, тамашасыны таң ҡалдырҙы...**

**Әхтәм Әхәт улы:** Эйе, был әҫәрҙе бик күп режиссерҙар ҡуйғайны. Айраттыҡын ҡарағас, мин дә аптыраным. Ул спектакль башланғанға тиклем булған ваҡиғаны ҡылынған гонаһ, хыянат итеп алды һәм артабан ваҡиғаларҙың үҫешен шул йүнәлешкә ҡорҙо. Һөҙөмтәлә бөтөнләй икенсе спектакль килеп сыҡты. Мостай Кәрим үҙе иҫән булһа, шулай уҡ аптырар һәм... моғайын, ҡыуаныр ҙа ине.

**▸ Балет тигәндән, беҙ 1972 йылда тәүге тапҡыр телевизор һатып алдыҡ. Бер саҡ шулай өләсәйем менән балет ҡарайбыҙ. Революцияға тиклем мәҙрәсәлә белем алған, ғәрәпсә уҡый-яҙа белгән, намаҙ уҡыған өләсәйемдең балетҡа биргән баһаһы шулай булды: "Ҡоромағырҙар, оялмайынса боттарын күтәреп тороп күрһәтәләр бит әле. Ҡуй, балам. Һүндер ул шайтан йәшниген..." Ринаттың балет бейеүсеһе булып китеүенә өләсәләре нисек ҡараны?**

**Әхтәм Әхәт улы:** Ринат балетҡа йөрөй башлағас, бер мәл ҡәйнәм унан ҡайҙа, нимә менән шөғөлләнеүе хаҡында һораша. Улым бер нисек тә аңлата алмағас, телевизорҙы асып, унда барған балетты күрһәтте. Ҡәйнәм уға: "Кит, кит... Юҡ һөнәр һайлағанһың. Бисәләрҙең бот-сатын айыртып, күтәреп йөрөү ҙә булғанмы һөнәр?" - тине. Мин ситтән генә йығылып ятып көлдөм...

**▸ Ринат, әгәр ҙә атайың менән әсәйең һине ошо юлға әйҙәмәгән булһа, кем булыр инең? Ниндәй һөнәрҙе һайлар инем тип уйлайһың?**

**Ринат:** Хатта икенсе бер һөнәр һайлаған булһам да, барыбер шул сәнғәт тирәһендә булыр инем тип уйлайым. Ағайымды ла кем генә итергә теләһәләр ҙә, барыбер сәнғәт юлынан киткән бит. Тағы ла япондарҙың бер тәжрибәһе хаҡында әйтеп үткем килә. Улар сабый баланың алдына төрлө-төрлө уйынсыҡтар, әйберҙәр сығарып һала ла, уның нимәне ҡулына беренсе булып алыуына иғтибар итәләр. Шуға ҡарап, балаға һөнәр һайлайҙар. Ҡәләм йә ручка алһа - яҙыуға, һүрәт төшөрөүгә бәйле һөнәргә, хеҙмәт ҡоралы алһа - техник һөнәргә туҡталғандар. Мин 10 йәшемдән алып бөгөнгә тиклем балет һөнәрендә йөрөйөм, әммә мин иртәгә нисек булырын әйтә алмайым. Әгәр ҙә балет ҡуйыусы булараҡ хеҙмәтем кәрәк булмай башлаһа, тотормон да икенсе бер һөнәргә китермен. Миңә башҡа өлкәләр ҙә бик ҡыҙыҡлы.

**Әхтәм Әхәт улы:** Ринат төрлө яҡтан оҫта, ҡулынан килмәгән эше юҡ. Ул автомобилдәр донъяһын, уларҙың төҙөлөшөн бик яҡшы белә. Элек өйҙә сүкеш, балта, бысҡы тотоуға, электр утына, сантехникаға, мебель йыйыуға бәйле барлыҡ ирҙәр эшен үҙем башҡара торғайным. Хәҙер әсәләре миңә был йәһәттән ышанмай, Ринатты саҡырып эшләтә.

(Дауамы 11-се биттә).



*ӘХТӘМ АБУШАХМАНОВ:*

*Әлбиттә, беҙ, хәҙерге заман атайҙары, күп йәһәттән үҙ улдарыбыҙҙан артта ҡалғанбыҙ, әммә тормош тәжрибәһе, тормош фәлсәфәһе буйынса уларҙан күберәкте беләбеҙ.*

ЯҢЫ ЙЫЛ СЦЕНАРИЙЫ

# "КӘКҮК" ОПЕРАЦИЯҺЫ

## һәм Ки-киның башҡа мажаралары

**Ҡатнашалар:**
**Ки-Ки** - әтәс
**Һыпы** - тауыҡ
**Ҡупырыш** - тауыҡ
**Биҙәү** - тауыҡ
**Ҡурҡ-ҡурҡ** - ҡурҡылдаҡ, йомортҡа баҫыусы тауыҡ
**Ғол-ғол** - күркә
**Мики** - маймыл
**Шырҡ** - инә һайыҫҡан
**Шырҡ-шырҡ** - ата һайыҫҡан
**Ҡыш бабай**
**Ҡарһылыу**
**Балалар**
**Себештәр**

### БЕРЕНСЕ КҮРЕНЕШ

***Тауыҡ ояһында Ҡурҡ-ҡурҡ йомортҡа баҫып ултыра. Теҙелешеп ҡулдарына берәр йомортҡа тотоп, Һыпы, Ҡупырыш, Биҙәү килеп инә.***

**Ҡурҡ-ҡурҡ:** Ҡурҡ-ҡурҡ... Йомортҡалар һыуына, йә, тиҙерәк ояма һалығыҙ ҙа, ысҡынығыҙ бынан, эшем күп... Ҡурҡ-ҡурҡ...

**Һыпы:** Эй-й-й-й, хәстрүш, эшем эйәһе. Тик ултырыуҙы ла эшкә һанаған була бит әле...

**Ҡупырыш:** Әйтмә лә инде, беҙҙең кеүек йомортҡа һала башлаһаң, белер инең. "Ашаған белмәй, тураған белә", ти Ғол-ғол. Әҙер йомортҡаны кем баҫмай?

**Биҙәү:** Етмәһә, "ҡурҡ-ҡурҡ"тан һалдырып, беҙҙе ҡурҡытмаҡсы үҙе...

**Һыпы:** Беҙҙең кеүек көнө буйы ем эҙләп, ҡом, балсыҡ араһында соҡонһаң, ҡәҙеребеҙҙе белер инең...

**Ҡупырыш:** Йә, ярай, ҡыҙҙар, уға күпме генә тыҡылдаһаң да, файҙаһыҙға.

**Биҙәү:** Киттек, ҡыҙҙар, әле кискә тиклем тағы ла йомортҡа һалып өлгөрөргә кәрәк...

**Ҡурҡ-ҡурҡ:** Ҡурҡ-ҡурҡ... Ҡыҙҙар, ҡарағыҙ әле, миңә йылға буйына барып, тибенеп-туйынып килергә кәрәк. Кисәнән бирле ауыҙыма ҡапҡаным юҡ. Берегеҙ ояла баҫып ултырып торһа, йүгереп кенә барып килер инем, ҡурҡ-ҡурҡ...

**Һыпы:** Бар, көндәш, йүгер, үҙем ултырып торам... Һәр ҡайһыбыҙ унар минут ултырһа ла, ярты сәғәт "һә" тигәнсе үтер, йүгер, әхирәт...

**Ҡупырыш:** Йомортҡалар өсөн борсолма, һыуытмабыҙ...

**Биҙәү:** Үҙебеҙ һалған йомортҡалар бит, йылытырбыҙ...

**Ҡурҡ-ҡурҡ:** Рәхмәт, ҡыҙҙарым-көндәштәрем. Мин остом, ҡурҡ-ҡурҡ...

***Һыпы оя өҫтөнә барып ултыра. Ҡурҡ-ҡурҡ сыға.***

**Һыпы:** Бигерәк бер ҡатлы ошо Ҡурҡ-ҡурҡ. Беҙме инде йомортҡа өҫтөндә ултырыр йән эйәһе...

**Ҡупырыш**: Романтик...

**Биҙәү:** Йүгерҙек, ҡыҙҙар, бая Ташлыға̄я аҫтындағы тиҙәк араһында бик һимеҙ селәүсендәр күреп ҡалғайным.

**Һыпы:** Киттек. Бая Ки-ки был яҡҡа килә ята ине. Ояһын ҡалдырған өсөн Ҡурҡ-ҡурҡҡа унан ныу әләгәсәк...

**Ҡупырыш:** Ки-ки Ҡурҡ-ҡурҡты туктауһыҙ маҡтай. Йәнәһе, ул йомортҡа баҫыр өсөн тыуған...

**Биҙәү:** Йәнәһе, уның тәне йылы, шуға күрә себештәр ҙә үҙ ваҡытында һәм һау булып йомортҡаны тишеп сыға.

***Улар йүгереп сығып китә. Шырҡ менән Шырҡ-шырҡ килеп инә. Улар оло кинәнес менән оя эсендәге йомортҡаларҙы суҡыштары менән ярып эсергә тотона.***

**Шырҡ-шырҡ:** Эй, бигерәк тәмле инде тауыҡ йомортҡалары...

**Шырҡ:** Эйе, атаһы. Әйтмә лә генә инде, йогурт кеүек...

**Шырҡ-шырҡ:** Мынау тауыҡбаштарҙы әйтәм, бигерәк бер ҡатлылар.

**Шырҡ:** Һуң шуға күрә лә уларҙы тауыҡбаш тип атайҙар бит инде.

**Шырҡ-шырҡ:** Әсәһе, һин һөйләнгәнсе, күберәк итеп эсеп, туйынып ал. Тиҙҙән үҙебеҙҙең себештәрҙе баҫырға ултырырға кәрәк. Һинә көс күп кәрәк булыр. Ана, теге тауыҡбаштарҙың килгәне күренә. Һыпырттыҡ...

***Улар сығып китә. Ҡурҡ-ҡурҡ күренә. Оя янына килеп еткәс, уның эсендәге йомортҡа ҡабыҡтарын күреп ҡалып, оя тирәләп йүгерергә тотона.***

**Ҡурҡ-ҡурҡ:** Ҡурҡ-ҡурҡ... Ҡарауыл! Ҡарауыл! Талайҙар! Себештәремде, бәпәйҙәремде, эх! Ҡарауыл!

***Уның илаған, һыҡтаған, ярҙам һораған тауышына Ғол-ғол, Ки-Ки, Һыпы, Ҡупырыш, Биҙәү килеп инәләр. Барыһы ла оя эсендәге хәлде күреп, шаҡ ҡата.***

**Ки-Ки**: Көпә-көндөҙ, минең йортома килеп... Кем баҙнат иткән?

**Ғол-ғол**: Ғол-ғол! Әле генә суҡыштары майланған Шырҡ-шырҡ менән Шырҡты күреп ҡалдым. Оялары ягына осоп киттеләр. Тик уларҙың ғына эшлеге...

**Ки-Ки:** Ҡурҡ-ҡурҡ, һин нимә ҡараның?

**Ҡурҡ-ҡурҡ:** Ҡурҡ-ҡурҡ... Мин... Мин... Асыҡып киттем дә, тибенеп кенә киләйем тигәйнем...

**Ки-Ки:** Тибенеп? Мин нимә тип әйткәйнем әле һинә? Тибенергә киткәндә берәрһен ояла ҡалдырырға тейешһең тип әйттем түгелме ни?

**Ҡурҡ-ҡурҡ:** Ә мин Һыпы, Ҡупырыш, Биҙәү әхирәттәремдә ҡалдырғайным...

**Һыпы:** Ул алдай, беҙ бер нәмә лә белмәйбеҙ...

**Ҡупырыш:** Беҙ Ташлыға̄я аҫтында булдыҡ...

**Биҙәү:** Ундағы тиреҫ араһында селәүсендәр эре...

**Ҡурҡ-ҡурҡ:** Һуң, ҡыҙҙар, ништәп алдашаһығыҙ? Ки-ки, мин, ысынлап та, уларҙы оя янында ҡалыуҙарын һорағайным. Улар риза булғайны.

**Ки-Ки:** Ҡурҡ-ҡурҡ, һинең бер ниндәй ҙә ғәйепең юҡ.

**Ҡурҡ-ҡурҡ:** Аллаһи-валлаһи, тыуасаҡ себештәрем менән ант итәм!

**Һыпы:** Ул себештәрҙең ысын әсәһе - беҙ, белгең килһә!

**Ҡупырыш:** Һин тәрбиәсе генә!



**Биҙәү:** Ашаған белмәй, тураған белә...

**Ҡурҡ-ҡурҡ:** Ҡыҙҙар, әхирәттәр. Мин бит һеҙҙе ҡалдырып киттем, Хоҙайҙан ҡурҡығыҙ!

**Ки-Ки:** Етте! Һеҙгә ирек кенә бир, бер-берегеҙҙе суҡырға әҙер генә торһағыҙ. Кемдең ғәйепле икәне барыбер асыҡланасаҡ...

***Шул саҡ Ғол-ғол оя эсенән суҡышы менән нимәләр үрелеп ала.***

**Ғол-ғол:** Бына был ҡауырый ояла иң һуңғыһы булып ултырыусыныҡы. Кемегеҙҙеке?

***Тауыҡтар бер-береһенә ҡараша. Һыпы ниҙҙермәй генә ҡасырға ынтыла. Уны Ки-ки тотоп ала.***

**Ки-Ки:** Һинең этлегең икәнен һиҙә инем. Әсәлек тойғоһо юҡ һиндә. Үҙ балаларыңды һайыҫҡанға ашатҡанһың.

**Һыпы:** Юҡ... Юҡ... Эйе, мин ғәйепле, падишаһым, әйт, ғәйебемде юйыр өсөн мин ни эшләргә тейешмен?

**Ки-Ки:** Минең фарманды тыңлағыҙ: йомортҡа һалыусы тауыҡтарға көнөнә ике норма үтәргә, Ҡурҡ-ҡурҡҡа уларҙы тиҙ арала баҫып сығарырға бойорам! Оя эргәһенән бер генә секундҡа ла ташлап китмәҫкә! Ҡурҡ-ҡурҡ тибенергә барып килгәндә оя өсөн Һыпы, Ҡупырыш, Биҙәү яуаплы! Әгәр ҙә минең фармандың бер генә пункты үтәлмәһә, ғәйепләне хужаларға салырға бирәм! Ишеттен ҡолағығыҙ! Хәҙер барығыҙ ҙа марш эш урынығыҙға!

***Барыһы ла сығып китә. Ғол-ғол, Ки-ки тороп ҡала. Ҡурҡ-ҡурҡ кире килеп инә лә, ояһын йомортҡа ҡабыҡтарынан таҙартырға тотона. Ки-ки Ғол-ғолдо сәхнәнең ситенә алып китә.***

**Ки-Ки:** Кәңәшең кәрәк, Ғол-ғол ағай. Был һайыҫҡандар тамам ялҡытты. Уларҙан берәр нисек ҡотолорға кәрәк ине. Ни әйтерһең?

**Ғол-ғол:** Улар беҙҙең ҡыҙыл кикеректән ныҡ ҡурҡа. Берәр нисек уларҙы ныҡ итеп ҡурҡытырға кәрәк.

**Ки-Ки:** Тәрләсә маташтырып ҡараныҡ бит инде. Нисек кенә итһәк тә, уларҙың хәйләкәрлеге еңә лә ҡуя. Тауыҡтар бер генә минутҡа ситкә китһә, шундуҡ килеп етә һалалар. Ағас араһынан ҡарап ҡына торалар ҙа. Ояларын туҙҙырып та, инә һайыҫҡан баҫып ятҡан йомортҡаларын ярып та ҡараныҡ. Әммә улар беҙҙең буй етмәслек ерҙәргә барып, тағы оя ҡорҙо, тағы ла себештәрен сығарҙы. Ояларын туҙҙырған өсөн беҙҙән икеләтә-өсләтә яһиллыҡ менән үс алды. Нисек еңергә уларҙы?

**Ғол-ғол:** Үҙҙәре кеүек үк инде.

**Ки-Ки:** Нисек?

**Ғол-ғол:** Хәйлә менән...

**Ки-Ки:** Мәҫәлән?

**Ғол-ғол:** Ояларынан йомортҡаларын алып ташлайбыҙ ҙа, урынына тауыҡ йомортҡаһы һалабыҙ...

**Ки-Ки:** Шунан?

**Ғол-ғол:** Ҡалғанын әсәлек инстинкты хәл итәсәк!

**Ки-Ки:** Ҡыҙыҡ! Елле идея! Ә бына... Ә бына һайыҫҡандың бейектәге ояһына нисек менергә һуң беҙгә?

**Ғол-ғол:** Уныһын да уйлап ҡуйғанмын. Маймыл мендереп һала.

**Ки-Ки:** Маймыл? Беҙҙең яҡта маймыл юҡ бит. Уны ҡайҙан, Африканан саҡырабыҙмы?

**Ғол-ғол:** Эй, тауыҡбаш, әле барған йылдың Маймыл йылы икәнен дә оноттонмо? Шуға бит беҙҙең илгә махсус рәүештә Мики тигән маймыл килде. Ул әле үҙенең резиденцияһында.

**Ки-Ки:** Үҙендең белмәгән нәмәң юҡ, Ғол-ғол ағай.

**Ғол-ғол:** Мин ике-өс башҡа һеҙҙән юғарыраҡ йөрөйөм бит. Бынан барыһы ла күренә.

**Ки-Ки:** Күренгәс, әйт әле, ҡайҙа йөрөй Мики?

**Ғол-ғол:** Уны саҡырыр өсөн минеке кеүек оҙон үңәс кәрәкмәй. Хәҙер саҡырайыммы?

**Ки-Ки:** Мөмкин булһа...

***Ғол-ғол кеҫәһенән телефон сығара.***

**Ғол-ғол:** Алло! Һаумыһығыҙ, Мики әфәнде! Мин әле "Ки-ки" фирмаһы офисында. Беҙгә ошо көндәрҙә һеҙҙең ярҙамығыҙ кәрәк буласаҡ. Ваҡытығыҙ ҡарап, ошо арала беҙгә килеп сыға алмаҫығыҙмы икән? Эйе, килештек, ике көндән, көтәбеҙ! Һау булығыҙ!

**Ки-Ки:** Мәсьәләне бик тиҙ хәл иттегеҙ, Ғол-ғол ағай! Аллаһ бойорһа, һеҙҙе себештәребеҙ сыҡҡас, бәпес туйына саҡырырбыҙ. Түребеҙҙә ултырырһығыҙ!

**Ғол-ғол:** Түре ҡасмаҫ, Ки-ки, тағы бер нәмәне әйтергә онотоп торам.

**Ки-Ки:** Тыңлайым, нимәне?

**Ғол-ғол:** Һайыҫҡандар ояһына һала торған йомортҡаларығыҙ әҙер булғас, шуларҙың янында 40 мәртәбә "Кикирикүк" тип ҡысҡырығыҙ, шунан ғына ояға мендерерһегеҙ...

**Ки-Ки:** Уныһы нимәгә, Ғол-ғол ағай?

**Ғол-ғол:** Мәле еткәс, белерһең! Кәкүктәр йомортҡаларын сит ояға һала. Шуға күрә беҙ ҙә операцияны "Кәкүк" тип атайыҡ.

**Ки-Ки:** Тик ней бит әле, Ғол-ғол ағай, беҙҙең тауыҡтар һалған йомортҡалар уларҙыҡынан ҙур булғас, һиҙеп ҡалмаҫтармы?

**Ғол-ғол:** Юҡ, киреһенсә, улар ояларында ҙур йомортҡа күреп ҡыуанасаҡ...

**Ки-Ки:** Ҡыуанасаҡ?

**Ғол-ғол:** Эйе...Ҡоштар араһында иң буры, иң хәйләкәре, иң мәкерлеһе - һайыҫҡандар. Уларҙың психологияһы шулай ҡоролған: иң ҙур, иң матур һәм иң күп нәмә уларҙың ояһында икән, был уларға оло ҡыуаныс ҡына...

**Ки-Ки:** Бер көндә генә күпме яңылыҡ ишеттем. Тауыҡтарҙыҡы һымаҡ башыма былар нисек һыйып бөтөр икән?

**Ғол-ғол:** Иң ҙур мөғжизә Яңы йыл байрамында буласаҡ, Ки-ки ҡустым, шунда осрашырбыҙ. Тик бая әйткәнемсә, һайыҫҡандар ояһына мендереп һала торған йомортҡалар янында 40 тапҡыр "Кикирикүк!" тип ҡысҡырырға онотма!

### ИКЕНСЕ КҮРЕНЕШ

***Уртала ҡупшы шыршы. Уны тирәләп балалар әйләнә. Ҡурҡ-ҡурҡ себештәрен өйөрөп йөрөй. Шунда уҡ Һыпы, Ҡупырыш, Биҙәү, Ғол-ғол, Ми-ки һәм Ки-Ки.***

**Ки-Ки:** Бөгөн беҙҙең оло байрам, хөрмәтле туғандарым! Йортобоҙға оло шатлыҡ килтереп, себештәребеҙ үҫеп етте!

**Ғол-ғол:** Беҙгә бөгөн оло ҡунаҡтар - Ҡыш бабай менән Ҡарһылыу Яңы йыл алып киләсәк, бүләктәр таратасаҡ, туйғансы ем ашаясаҡбыҙ, йырлаясаҡбыҙ, бейейәсәкбеҙ!

**Мики:** Өҫтәүенә, бөгөн барыбыҙҙы ла оло мөғжизә көтә...

**Барыһы бергә:** Мөғжизә? Ниндәй мөғжизә?

**Ғол-ғол:** Эй ошо Микины. Был хаҡта әйтмәй торорға һөйләшкәйнек бит, Мики! Белгең килһә, мөғжизәгә алдан реклама кәрәкмәй. Ул ҡапыл, көтмәгәндә килеп сығырға һәм барыһын да хайран итергә тейеш! Алдан әйтһәң, ҡыҙығы бөтә.

**Мики:** Түҙеп булмай бит, Ғол-ғол. Күпме илдәрҙә булдым һәм был тиклем дә мөғжизәне күрермен тип уйламағайным. Мөғжизә булырын әйтһәм дә, әле балалар ни икәнен белмәй ҙаһа...

**Ки-Ки:** Мин дә түҙә алмайым, Ғол-ғол ағай. Ана, себештәрем дә, уларҙың әсәләре лә, балалар ҙа көтә ул мөғжизәне!

**Ғол-ғол:** Беҙ ул мөғжизәне Ҡыш бабай менән Ҡарһылыу килгәс, күрһәтергә булдыҡ. Шулай һөйләштек. Сабыр итәйек!

**Барыһы бергә:** Мөғжизә! Бөгөн Ҡыш бабай менән Ҡарһылыу килгәс, мөғжизә буласаҡ!

**Ғол-ғол:** Һәйбәт! Ҡунаҡтар килә!

***Ҡыш бабай менән Ҡарһылыу инә. Шыршы янындағы барыһы ла уларҙы шатланып, гөр килеп ҡаршылай.***

**Ҡыш бабай:** Һаумыһығыҙ, ғәзиз балаларым, йәнлектәрем һәм ҡоштарым!

**Ҡарһылыу:** Яңы йыл байрамы мөбәрәк булһын!

*✓ Бөгөн техник белем хаҡында диплом алһаң, өс йылдан дипломың иҫкергән була. Сөнки техника үҫеше шул тиклем ҙур тиҙлектә алға бара. Ә бына гуманитар белем хаҡындағы дипломың ҡулыңа алмаҫ элек үк иҫкереп өлгөрә.*



**Ки-Ки:** Һаумыһығыҙ, хөрмәтле ҡунаҡтар! Түребеҙгә уҙығыҙ! Яңы йыл тик яңы шатлыҡтар, яңы дуҫтар, себештәребеҙгә мул-мул күстәнәстәр алып килһен!

**Балалар:** Төклө аяғығыҙ менән, Ҡыш бабай олатай, Ҡарһылыу апай! Яңы йыл байрамына рәхим итегеҙ!

**Себештәр:** Сип-сип-сип, Яңы йыл, кил, кил, кил, Иҫке йыл, кит, кит, кит! Сип-сип-сип!

**Ҡыш бабай:** Ки-ки туған беҙҙе Яңы йыл байрамына саҡырып шылтыратҡанда шыршы янында уйындар башланырҙан алда ниндәйҙер бер мөғжизә буласағы хаҡында иҫкәрткәйне

**Ҡарһылыу:** Сюрприз була тигәйне!

**Балалар:** Сюрприз! Ура-а-а-а-а!

**Себештәр:** Сип-сип-сирприз нимә була ул?

**Ки-Ки:** Йә, Ғол-ғол ағай, тиҙерәк күрһәтә һалайыҡ ул сюрпризды?

**Ғол-ғол:** Уны мин түгел, Ки-ки ҡустым, һин күрһәтергә тейешһең!

**Ки-Ки:** Мин? Үҙем дә белмәгән ниндәй мөғжизә тыуҙыра алам икән ул?

**Ғол-ғол:** Ул һинең тауышыңа, йәғни йырыңа бәйле!

**Ки-Ки:** Тауышыма? Йырыма? Өйрәт һуң?

**Ғол-ғол:** Мин уны һиңә өйрәтә алмайым. Беҙ, күркәләй ғолғолдай ғына беләбеҙ! Мөғжизә һинең 40 тапҡыр "Кикирикүк!" тип әйткәнеңдән һуң тыуасаҡ.

**Ки-Ки:** Хәҙер үк әйтергәме ни?

**Ғол-ғол:** Атыу...

**Ки-Ки:** Минең өсөн донъяла иң еңеле шулай ҡысҡырыу инде. Хәҙер булдырабыҙ уны...

**Һыпы:** Тауышың ғына етһен, атаһы!

**Ҡупырыш:** Беҙҙе саҡырған һымаҡ итеп ҡысҡыр!

**Биҙәү:** Мин дә шулай уйлайым...

**Ҡурҡ-ҡурҡ:** Тик себештәрҙең ҡолағын ярып ҡуйма, атаһы!

**Ғол-ғол:** Халыҡ һине көтә, Ки-ки ҡустым! Яңы йыл ҡаршылағанда тарихҡа инеп ҡалыр иң ҙур яңылыҡ шул буласаҡ!

**Мики:** Мөғжизә күктән төшәсәк, йәмәғәт!

**Ҡыш бабай:** Йырыңды башла, Ки-ки туғаным!

**Ҡарһылыу:** Сюрприз көтәбеҙ!

**Ки-Ки:** Кикирикүк! Кикирикүк! Кикирикүк! Кикирикүк! Кикирикүк...

***Барыһы ла күккә төбәлә. Ки-ки 40-сы мәртәбә ҡысҡырғандан һуң күктән берәм-берәм ҙурайып уҡ бөткән тауыҡ себештәре шыршы янына осоп төшә башлай. Уларҙың артынан Шырҡ-шырҡ менән Шырҡ та килеп төшә. Ерҙәгеләр барыһы ла был күренешкә шаҡ ҡата.***

**Шырҡ-шырҡ:** Ҡайҙа осоп киттегеҙ, ғәзиз себештәрем? Тик торғанда, ниңә йөрәгегеҙ ҡупты?

**Шырҡ:** Атайығыҙ менән осорға өйрәтәбеҙ, тип саҡырғанда берегеҙ ҙә һыңар ҡанатын да күтәрмәне. Ниндәйҙер бер Ки-ки тигән әтәс ҡысҡырған өсөн генә ниңә ергә осоп төштөгөҙ, бәпәйҙәрем?

**Ҡыш бабай**: Мин һаман да аңлап бөтмәйем, ҡайҙан килеп төштө һуң был тауыҡ себештәре? Ниңә уларға һайыҫҡандар эйәргән? Ки-ки туғаным, үҙең аңлатып бирәһеңме әллә?

**Ҡарһылыу:** Ҡаҙ, өйрәк себештәрен тауыҡтар баҫып сығарғанын күргәнем бар, әммә бындайҙы тәүге тапҡыр күрәм. Сенсация!

**Ки-Ки:** Мин дә телһеҙ ҡалдым, Ҡыш бабай олатай, әммә был мөғжизәнең авторы Ғол-ғол ағай менән Мики. Мин тулы килеш белмәйем. Улар үҙҙәре аңлатһын...

**Ҡыш бабай:** Ғол-ғол, Мики туғандар, йә, инәлтмәгеҙ инде...

**Ғол-ғол:** Мәйелегеҙ, һайыҫҡандарға ғибрәт, һеҙгә кәмит булһын. Бының серен беҙ өсөбөҙ генә, Ки-ки, Мики һәм мин генә белдек.

**Ҡыш бабай:** Шунан?

**Ғол-ғол:** Шунан ни шул, Ҡурҡ-ҡурҡ баҫып ятҡан йомортҡаларҙы һайыҫҡандар ярып ашағас, беҙ уларҙы аҡылға ултыртырға булдыҡ...

**Ҡыш бабай:** Нисек итеп?

**Ғол-ғол:** Үҙҙәренән дә былайыраҡ хәйлә менән.

**Ҡыш бабай:** Һайыҫҡанды ла еңер хәйлә бар икән дә...

**Ғол-ғол:** Бар шул. Беҙ уларҙың ояһынан үҙҙәренең йомортҡаһын алып ташланыҡ та, тауыҡ йомортҡаларын һалдыҡ. Артабан ни булғанын үҙегеҙ күреп тораһығыҙ.

**Ҡыш бабай:** Быға тиклем ниңә улар һайыҫҡан ояһынан осоп төшмәне һуң?

**Ҡарһылыу:** Эйе, шуныһы ҡыҙыҡ...

**Ғол-ғол:** Донъяла ҡан хәтере тигән төшөнсә бар. Беҙ тауыҡ йомортҡаларын һайыҫҡан ояһына һалыр алдынан Ки-кинан 40 мәртәбә "Кикирикүк!" тип ҡысҡыртып, тыуасаҡ себештәрҙең хәтеренә уның тауышын һалып ҡуйҙыҡ. Шул ғына!

**Ҡыш бабай:** Күпме ерҙәрҙә булдым, күпме һыуҙар кистем, күпме илдәргә Яңы йыл алып килдем, әммә быға тиклем һайыҫҡандарҙың тауыҡ себештәренә ата-әсә булғанын күргәнем юҡ ине әле. Был - мөғжизәнең дә мөғжизәһе. Был хәлде Гиннестың "Рекордтар китабы"на индерергә тәҡдим итәм. Ки-ки, һинең иләндә булған был сенсация барлыҡ Ер шарын урап үтеп, һеҙҙе маҡтауҙарға, данға күмәсәк. Ҡәҙерле балалар, шатланығыҙ, көлөгөҙ, Яңы йыл бүләктәрен ҡабул итеп алығыҙ!

**Шырҡ-шырҡ:** Беҙ барыһын да аңланыҡ, Ҡыш бабай, беҙҙе ғәфү итегеҙ!

**Шырҡ:** Себештәребеҙ янында, тауыҡ ояһында ҡалырға рөхсәт итегеҙ!

**Ҡыш бабай**: Бына бит, балалар, ата-инәлек тойғоһо хатта һайыҫҡандарҙы ла игелекле итә.

**Ғол-ғол:** Был мөғжизәнең тағы ла бер яғы бар: ергә 2017 - Әтәс йылы килә. Бөгөн Ки-ки 40 мәртәбә ҡысҡырғайны еребеҙгә себештәр яуҙы. Был бик яҡшы билдә!

**Ҡыш бабай:** 2017 йылда, унан алда ла шулай еребеҙгә ҡот, бәрәкәт кенә яуһын!

***Барыһы ла шыршы тирәләй әйләнә, бәхетле йылмая, көлә. Ҡыш бабай уларға яңы йыл бүләктәре, күстәнәстәр өләшә.***

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

ЗАМАН БАШҠОРТО

# БАЛАЛАРЫБЫҘҘА БАЛАНЫ ТҮГЕЛ...

## үҙебеҙҙе яратабыҙ шул инде беҙ

**(Башы 8-9-сы биттәрҙә).**

**▸ Балетты Әхтәм ағай "тән менән йырлау сәнғәте" тип баһаланы. Ә ни өсөн шундай нескәлекте тыуҙырыр өсөн 4 костюм лыҡа һыу булырлыҡ көсөргәнеш һалырға кәрәк һуң?**

**Ринат:** Минеңсә, был мәсьәлә барлыҡ сәнғәттә лә шулай ҡуйылған. Драма театрында ла һәйбәт спектакль килеп сыҡһын өсөн күпме тир түгергә кәрәк.

**Әхтәм Әхәт улы:** Балетта эске тойғоно тышҡа сығарып күрһәтеү өсөн ҡот осҡос көс талап ителеүе бәхәсһеҙ. Драма театрында тойғондо тамашасыға еткерер өсөн дә күпме көсөргәнеш кәрәк. Мәҫәлән, мин Мостай Кәримдең Салауатын уйнаған саҡта берәр биҙрә тир аға ине. Әгәр ҙә хистәрең тамашасыға барып етмәһә, театрҙа һинең кәрәгең дә юҡ.

**▸ Айрат, әгәр ҙә һин сәнғәт юлынан китмәгән булһаң, үҙеңде бөгөн кем итеп күрәһең?**

**Айрат:** Атайым теләгәнсә, тарих факультетына барһам, бөгөн кәмендә берәр ғалим булып йөрөр инем. Һәр хәлдә, ҡайҙа йөрөһәм дә, ярлы булмаҫ инем.

**Ринат:** Хәҙерге ваҡытта техник белем өс йылда иҫкерә. Бөгөн техник белем алып, диплом алһаң, өс йылдан дипломың иҫкергән була. Сөнки техника үҫеше шул тиклем ҙур тиҙлектә алға бара. Ә бына гуманитар белем хаҡындағы дипломың ҡулыңа алмаҫ элек үк иҫкереп өлгөрә. Йәғни, ул үҙеңдән башҡа бер кемгә лә кәрәкмәй.

**Әхтәм Әхәт улы:** Ана шул кисәгенең бөгөн иҫкереүе беҙҙең прогресҡа шул тиклем тотҡарлыҡ яһай ҙа инде. Беҙ иҫке ҡарашҡа яңылыҡты көсләп тығырға тырышабыҙ. Донъя кимәленән сығып ҡараһаң, беҙ был йәһәттән ныҡ артта ҡалғанбыҙ.

**▸ Ринат, балетҡа һин ниндәй аңлатма бирер инең? Ул беҙҙең халыҡ өсөн ят күренешме, әллә юҡмы?**

**Ринат:** Бейеү һәр ваҡыт булған, ул ораторлыҡ сәнғәтенә ҡарағанда ла алдараҡ тыуған. Бейеү башта тән хәрәкәте менән ниндәйҙер мәғлүмәт еткереү сараһы булған. "Хореография" тән менән яҙыу, рәсем төшөрөү тип тәржемә ителә. Балет - ул матур хәрәкәттәр генә түгел, унда психология ла бар. Яңыраҡ "Малые Нуриевские" тигән фестиваль үтте. Унда Рәсәйҙәге бөтә балет мәктәптәре вәкилдәре килде, "Балет" журналының баш мөхәррире Уральская ла ҡатнашты. Беҙ фестиваль сиктәрендә "Һыуһылыу" спектаклен күрһәткәйнек, шул хаҡта баш мөхәррир: "Беҙ классиканы ҡуйырға яратабыҙ. Әммә төбәктәге театрҙарҙың үҙ йөҙө булһын өсөн барыбер ҙә милли спектаклдәр кәрәк. Фәҡәт милли менән классиканың синтезы булғанда ғына төбәк театрының милли йөҙө барлыҡҡа киләсәк. Оригиналь сәнғәт төбәктә үҫеш алып, беҙгә, Санкт-Петербургҡа килә", - тине.

**▸ Ә бына беҙҙең ерлектән үҫеп сығып, донъя кимәлендә танылыу яулаған Рудольф Нуриев сәнғәтендә башҡорт тамыры нисек сағылыш таба?**

**Ринат:** Беҙҙең халыҡ тураһында ҡайһы ваҡыт "ҡыҙыу ҡанлылыҡ" тигән эпитет ҡулланыла. Минеңсә, ул беҙҙәге шул сифатын ҡанында Европаға алып сығып, "һалҡын ҡанлы" донъяла ут тоҡандырып ебәргән. Шуға күрә, уның тураһында һөйләгәндә һәм яҙғанда иң күп ҡулланылған эпитет "ажар темперамент" һүҙе. Уның ҡеүәте, ҙур көсөргәнеш менән ижад итеүе беҙҙән сыҡҡандыр инде ул. Ул саҡта Европала, беҙҙә бик күп көслө балет бейеүселәре була. Нуриев шундай аҙымға бара: ул барлыҡ бейеүҙәрҙең темпын үҙгәртә. Ә техника, темперамент ҡайҙан килә? Әлбиттә, ҡандан килә.

**Әхтәм Әхәт улы:** Академтеатр менән сит илдәрҙә гастролдәрҙә йөрөгәндә беҙҙең театр хаҡында, психологияға, фекергә бик иғтибар итмәйенсә, "ниндәй эмоциональ театр" тигән баһа бирәләр ине. Сит ил тамашасыһына беҙҙең спектаклдәрҙә хистәрҙең ҡайнап тороуы оҡшай торғайны.

**Ринат:** Миңә лә ситтәр: "Ҡалай һеҙҙә эмоциялар көслө ул. Башҡорттарҙа талантлы кешеләр шуға күрә лә күптер инде", - тип әйткәндәре бар.

**▸ "Һыуһылыу" спектаклендә "Аҡ ҡалфаҡ" йырының мотивтары яңғырап китә. Ут күршеләребеҙ дәғүә белдермәнеме?**

**Ринат:** Белдерҙеләр. Йырҙың тарихын өйрәнә башлаһам, ул көйҙө беренсе тапҡыр башҡорттарҙан Мөхәмәтша Буранғолов яҙып алған, ул "Күсмә халыҡтар көйө" тип атала.

**▸ Айрат, һиңә лә шундай уҡ профессиональ һорау: башҡорт театрында ниндәй генә сит ил, икенсе милли драматургия әҫәре ҡуйылмаһын, унда барыбер ҙә башҡорт милли характеры ла сағылырға тейешме? Әгәр ҙә шулай икән, уның сағылышын нисек итеп аңлатырға була? Әйтәйек, Арыҫлан Мөбәрәковтың Отелло монологы ҡолаҡҡа салыныу менән "башҡорт Отеллоһы" образы барлыҡҡа килә.**

**Айрат:** Милли характер иң беренсе телдә сағылыш таба. Театрҙа мәҙәниәтте телдә генә һаҡлап була. Хәҙер башҡорт театры актерҙары ла тормошта урыҫса һөйләшә. Ролдәрен улар ятлап уйнайҙар. Оло артистар менән йәш артистарҙың сәхнәлә һөйләшеүе ныҡ айырыла. Йәштәр урыҫса фекерләп, башҡортса һөйләгәс, һүҙҙәге баҫымды дөрөҫ ҡуймайҙар. Артист сәхнәлә һөйләгәндә тауыш яралғылары вибрация бирергә тейеш. Уны мелодика тиҙәр. Спектаклдә артистар нисек кенә оҫта уйнамаһын, пластика күрһәтмәһен, декорация нисек кенә бай булмаһын, улар күҙ өсөн генә. Спектакль тамамланып, тамашасы өйөнә ҡайтҡас, ул картина онотола. Яҡшы спектакль спектакль бөткәс башлана, ул тамашасының күңелендә оҙаҡ ваҡыт уйналып йөрөй. Бында тауыш иң төп ролде уйнай. Шуға күрә, элекке артистар һүҙ менән ярты сәғәт буйына сәхнәне тотоп тора алалар ине. Әгәр ҙә артист һүҙҙәрен ятлап ҡына һөйләһә, әйткән һүҙе елгә оса.

**Әхтәм Әхәт улы:** Килешәм, әгәр ҙә тауышҡа фекер һалынмаһа, уның шаңдауы булмай.

**Ринат:** Һин ниндәй телдә фекерләйһең, шул һинең туған телең. Һин хатта башҡортса һөйләшә белергә лә мөмкинһең, әммә башыңдағы фекерҙәрең урыҫса йөрөһә, туған телең - урыҫ теле.

**Әхтәм Әхәт улы:** Шекспирҙы башҡорт театры инглиздар һымаҡ уйнай алмай. Уларҙың уйнағаны барыбер башҡортса килеп сыға.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Аталы-уллы Абушахмановтар менән тағы ла бик оҙаҡ һөйләшеп ултырҙыҡ. Шуныһы ҡыҙыҡ: улар менән ниндәй генә тема тураһында һөйләшһәң дә, һәр ваҡыт яңы фекер, кинәйә, миҫал, сағыштырыу һәм быға тиклем бер тапҡыр ҙа башыңа ла инеп сыҡмаған дәлил ишетәһең. Мине Әхтәм ағайҙың улдары Айрат менән Ринаттың үҙ-ара һәм аталарына ҡарата булған мөнәсәбәте һоҡландырҙы. Ә һеҙҙә ниндәй тойғолар ҡалды?**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

## ИНТЕРНЕТТАН



# ЙӘНҺҮРӘТ...

## хеҙмәткә әҙерләй

■ Бака исемендәге институт тикшеренеүселәре билдәләүенсә, асығыу баш мейеһенә ял итергә мөмкинлек бирә. Оҙайлы ваҡыт асығыу һөҙөмтәһендә нейрондар араһындағы берләшмәләр әүҙемлеге кәмей һәм баш мейеһе көс йыйып ала. Һынауҙар емеш-еләк себендәренең ҡарышлауыҡтарында үткәрелгән. Башта себендәргә аҫһым, һуңғараҡ бөтөнләй ризыҡ бирелмәгән. Өс сәғәт үткәс, нейрондар араһындағы берләшмәләр әүҙемлеге 50 процентҡа кәмегән. Туҡлыҡлы матдәләр булмаһа, нейромедиаторҙар аҙыраҡ бүленгән, энергия ҡулланыу кәмегән. Белгестәр иҫәпләүенсә, кешеләрҙә был процесс ошолай уҡ бара. Был асыш ғалимдарға эпилепсия кеүек ауырыуҙарҙы дауаларға мөмкинлек бирәсәк. Асығыу шулай уҡ ябығырға, юғары ҡан баҫымын, холестерин кимәлен төшөрөргә ярҙам итә. Бынан тыш, асығыу стрестан һаҡлай.

■ Диснейҙың яңы йәнһүрәттәре балаларҙың күңелен асып ҡына ҡалмай. Улар ҡыҙ балаларҙа буласаҡ карьераларҙы тураһында ҡараш формалаштыра һәм хеҙмәт эшмәкәрлегенә әҙерләй. Белгестәр 1937 йылдан алып төшөрөлгән 54 йәнһүрәтте өйрәнеп, ошондай фекергә килгән. Уларҙың әйтеүенсә, ҡатын-ҡыҙ персонаждарының эшкә мөнәсәбәте лә, уларҙың шөғөлдәре лә үҙгәргән. "Көлһылыу" кеүек әкиәттәрҙең элекке персонаждары, ҡағиҙә булараҡ, көсһеҙ итеп күрһәтелгән. "Зверополис", "Һалҡын йөрәк" кеүек яңы йәнһүрәт героинялары көслө холоҡлолар, эшләп йөрөйҙәр йәки эшләргә теләйҙәр.

■ Өлкән быуын һәр ваҡыт йәштәрҙе тәрбиәһеҙлектә ғәйепләй. Төрлө ил белгестәре бының сәбәбен асыҡларға тырышып ҡараған. Эксперимент ойошторолған һәм уның сиктәрендә төрлө быуын кешеләре ситуацияны ҡарап, ике юлдың береһен һайларға тейеш булғандар. Тәүге вариантта шәхси мораль йөҙөндә һаҡлап ҡалып, бер кешене ҡотҡарырға мөмкин булған. Икенсе вариантта бер нисә тиҫтә кешене һәләкәттән ҡотҡарырға мөмкин, әммә быны әхлаҡһыҙ ҡылыҡ ҡылып ҡына эшләп булған. Экспериментта ҡатнашыусы йәштәр әхлаҡлылыҡтан баш тартып, күберәк кешене ҡотҡарыуҙы һайлаған. Ә бына өлкән йәштәгеләр тәүге исулды үҙ иткән. Рәсәйҙәрҙең ҡараштары сит илдәрҙә йәшәүселәрҙән айырылып торған. Белгестәр фекеренсә, әхлаҡи ҡиммәттәр кешенең мәҙәни һәм эмоциональ компоненттарынан формалаша. Ә был компоненттар кеше йәшәгән заманға һәм уны уратып алған мөхиткә бәйле. Ошо сәбәпле йәштәрҙе ололар аңламай ҙа инде.

■ Кокос сәтләүеге майы артыҡ һимеҙлекте дауалау, шулай уҡ инсульт һәм Альцгеймер ауырыуын иҫкәртеү өсөн файҙалы. Был турала Квинсленд (Австралия) ғалимдары белдерә. Уларҙың фекеренсә, кокос майы диабет һәм йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренән яфаланыусыларға ярҙам итәсәк, сөнки был продукт холестерин кимәлен түбәнәйтә һәм инсулин кимәлен нормаға килтерә. Быға тиклем фәндә Британия ғалимдарының кокос майының кариесты иҫкәртеү тураһындағы асышы билдәле ине. Бынан тыш, кокос майы енел үҙләштерелә һәм матдәләр алышыныуын әүҙемләштерә.

## КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

**Кино - кеше күңеленә үтеп инерҙәй иң мауыҡтырғыс сәнғәт төрө ул. Мәғәнәле, юғары зауыҡлы фильмдарҙың тәрбиәүи әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Бала саҡ хәтирәләренән иҫтә ҡалған: ауылға яңы кино килтерһәләр, ауыл клубы шығырым тулы була, бар ауыл халкы берҙәй булып экрандағы тормош менән йәшәй торғайны. Кино ҡарап, ҡыҙҙар - матурлыҡ, нәзәкәтлек, егеттәр илһөйәрлек, ирҙәрсә ныҡлыҡ сифаттарын күңелдәренә һеңдерҙе. Былары - нәфис фильмдарҙың йоғонтоһо тураһында, ә тағы документаль, ысын хәл-ваҡиғаларҙы, шәхестәрҙе яктыртҡан таҫмалар бар бит әле. Уларҙың әһәмиәте бигерәк тә ҙур. Сөнки нәфис фильмдарҙы йылдар үтеү менән икенсе артистарҙы уйнатып, яңынан төшөрөргә була, ә донъянан киткән шәхестәрҙең тормошо ҡабатланмай.**

# РУХИ КӨСӨБӨҘ...

## телебеҙҙә, моңдарыбыҙҙа, ҡурайыбыҙҙа



Юлай Ғәйнетдиновтың халыҡ таланттары тураһында төшөрөлгән документаль фильмдары - бына ошондай ҡабатланмаҫ, алтынға тиң оло ҡомартҡы ул. Уның "Хазина" телетапшырыуҙары ваҡытында иң үтемле, тамашасыларҙың иң көтөп алған тамашаһы ине. Хәҙер ҙә уларҙы халыҡ яратып ҡарай, тик улар экрандарға бик һирәк сыға.

Юлай Ишбулды улы Баймаҡ районынан сыҡҡан таланттар тураһындағы документаль фильмдары йыйылмаһын Баймаҡ район китапханаһы фондына бүләк иткәс, был таҫмаларҙы халҡыбыҙға еткереү өсөн "Алтын ҡомартҡы" тип аталған район эстафетаһы үткәрергә ҡарар ителде. Ул китапханалары булған һәр ауылда үтте. Сараларҙа ауыл хакимиәте башлыҡтары, китапханасылар, мәктәп уҡытыусылары, клуб хеҙмәткәрҙәре, "Агинәйҙәр", "Атайсалдар" ҡорҙары ағзаларының берлектә дәррәү ҡатнашыуы эстафетаның уңышын тәьмин итте лә инде. Эстафета райондың 39 ауылында үтеп, төрлө быуын кешеләрен бергә йыйҙы. Кисәләр барышында Юлай Ишбулды улының төрлө йылдарҙа төшөрөлгән телефильмдары күрһәтелде. Күп ауылдарҙа ул фильм геройҙарының хәтер һәм ҡәҙер кисәһенә әйләнде, сөнки тапшырыуҙарҙың геройҙары күптән инде баҡыйлыҡҡа күскән шәхестәр. Иҫке Сибайҙа - йырауҫы Мәүжиҙә Айыткөловаһы, Кәрешкәлә - ҡурайсы Нәжметдин Ишбаевты, Ниғәмәттә - атаҡлы фольклорсы Кәрим Дияровты, Ишмөхәмәттә - яугир йырсы Мәхмүт Галинды, Татлыбайҙа - ҡурайсы Салауат Хәйбуллинды, Ишбирҙелә - оҫта ҡурайсы Данияр Моратовты, Өмөтбайҙа - бейеүсе Марсель Мәжитовты, Һаҡмарҙа - Мөхәмәт һәм Азамат Ҡәҙерғоловтарҙы, Ҡолсорала - талантлы шәхес Хәким Моратовты хөрмәтләп иҫкә алдылар. Әхмәр ауылында ҡурайсы Хәбир Байтимеровтың туғандары, Яратта Әхмәтовтар аталары Мөхәмәтхәбиб Хәлфетдин улы хөрмәтенә аят уҡытып, ҙур табын үткәрҙеләр.

Юлай Ғәйнетдиновтың фондында арҙаҡлы шәхестәр - дәүләт эшмәкәре Зәкәрейә Аҡназаров, тарихсы Әнүәр Әсфәндийәров, яҙыусы Рамаҙан Өмөтбаев, талантлы етәксе Әкрәм Ниғмәтуллин, артист Хәмзә Ҡурсаев, яугир Бәҙри Мәмбәтколов, сәсән Шәһәргәзе Ғәбдиев, ҡурайсылар остазы Әҙеһәм Искужин тураһында ла ҡабатланмаҫ, баһаһы юйылмаҫ документаль таҫмалар бар. Әлбиттә, был яҙмаларҙы ла Шүлкәлә, Юлыҡта, Түбәлә, 2-се Әткөлдә, Сыңғыҙҙа, Темәстә киноҙеп ҡаранылар, оло шәхестәр тураһында бик күп йылы һүҙҙәр әйтелде, хәтирәләр яңыртылды.

Бынан 20 йыл элек Баймаҡта үткән тәүге "Байыҡ" бейеү бәйгеһенә арналған таҫма баймаҡтар өсөн айырыуса ҡәҙерле бүләк булды. Әкрәм Ниғмәтуллин башланғысы менән ойошторолған был бәйгелә данлыҡлы бейеүсе Мөхәмәт Иҙрисов үҙе ҡатнашып, оло фатиһаһын биргән. Буранбай ауылынан Зарифа һәм Фәттәх Аралбаевтар, Үрге Йәйыҡбайҙан Әлфиә Иҙрисова, Үрге Иҙрис ауылынан Айыткол Сәлихов, Ҡуянтауҙан Урал Боҫҡонов, Әхмәҙиә Хәлитов, Әбделкәримдән Азамат Кәримов, Ишмырҙанан Илмир Йәнбәков, Билалдан Дилара Әхмәтова, Күгиҙелдән Азамат Нарынбаев, Күсейҙән Әухәҙи Ласынов, Аҡморондан Алтынбай Дурдыев һәм бик күптәр ошо сараларҙың төп геройҙары булған. Билдәле

## БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ҺАТЫУСЫ ҺӘМ ҺАТЫП АЛЫУСЫ



**Һатыусы булып эшләгән танышың булыу, магазиндың артҡы ишегенән инеп-сығып йөрөй алыу оло бәхеттәй ҡабул ителгән ул замандар онотолмай.**

Бына бер саҡ магазиндың тәҙрәһенән билмән һаталар, ә һатып алыусылар һалҡын ҡышҡы көндә урамда оҙон сират булып теҙелгән. Минең сиратым етте, тигәндә, балалар поликлиникаһының бер табибы үтеп барыуын күреп ҡалдым. Балам ул табипта бер-ике тапҡыр дауаланғайны. Табиптың янына йүгереп барҙым һәм: "Һеҙгә билмән кәрәкме? Минең арттан баҫығыҙ, ирем тип әйтермен", - тип сиратҡа саҡырҙым. Табип шатланып ризалашты. Бына минең сиратым етте һәм мин: "Минә һәм иремә", - тигәйнем, һатыусы: "Был бит һинең ирең түгел. Һинең ирең сибәр, ә был ир..." - тип әйтеп һалды. Минең сибәр иремде күҙгә элә йөрөгәндәр шул был һатыусы. Шулай итеп, ул мине гәм халыҡ алдында оятҡа ҡалдырып, ҡулыма ике ҡап ҡына билмән тотторҙо. Табип эргәмдән китеп барғайны инде. Мин һатыусы менән иҫәпләштем дә, тиҙ генә табипты ҡыуып етеп, бер ҡап билмәнемде алыуын үтендем. Бер ҡап та ул заманда ҡыуаныс ине. Йылмайышып, һаубуллаштыҡ...

Бына "үҙгәртеп ҡороу" йылдары башланды. Магазинда булған ғына бар тауарҙы талон буйынса һатып алабыҙ. Араҡыға талон үҙемә кәрәкмәй, уны магазин тирәһендә өйөрөлөүсе берәй иргә һатам да, аҡсаһын кәрәк-ярағыма тотонам. Тик оҙаҡҡа һуҙылманы был хәл. Бер ай үтеүгә, талондарынды тауарға алыштырыу өсөн журналға шәхси ҡултамғанды ҡуйыу тәртибе индерелде. Бер айҙан тағы үҙгәреш: был юлы паспортыңды күрһәтеп, журналға ҡултамғанды ҡуйып, талоныңа тауар алаһың. Тағы бер айҙан үҙең менән паспорт һәм ике буш шешә алып килергә кәрәк булып сыҡты. Күршем: "Юбилейға кәрәк", - тип инәлгәс, ул биргән буш шешәләрҙе сумкама һалып, барып баҫтым оҙон сиратҡа. Сиратым еткәс, һатыусы бөтөн залға ишетелерлек итеп: "Ошо ҡатын көн дә араҡы һатып ала!" - тип ҡысҡырып әйтте. Ыҫынлап та, күршемә араҡы алырға тип килгәндә тәүҙә паспортты оноткайным, икенсе юлы буш шешәләр алып килмәгәнмен, әле бына өсөнсөгә килеп баҫҡайным сиратҡа. Һатыусы иҫендә ҡалдырған, күрәһең. Һатыусыларҙың "әсе таблеткаларын" йотоп өйрәнгәйнек бит инде. Уға ҡайтарып бер һүҙ ҙә әйтмәнем, тик сиратта минең уҡыусыларымдың атаәсәләре баҫып торһа, ҡалай оят булды инде, тип кенә борсолдом...

Икенсе көн эшкә барғас, ҙур тәнәфестә һатыусының бөтөн халыҡ алдында оятҡа ҡалдырыуын көлә-көлә һөйләнем. Шул саҡ музыка уҡытыусыһы һуҡ бармағын юғарыға күтәреп: "Беҙ кем инде, бары тик ябай уҡытыусылар! Ә ул ябай ғына һатыусы түгел бит, ул араҡы һатыусы - иң ҙур кеше!" - тип, мин һөйләгән күренеште йомғаҡлап ҡуйҙы...

Торғонлоҡ, ҡытлыҡ йылдары үтте. Социализмды емерҙек, ҡырағай капитализм төҙөнөк. Әммә һатыусы һәм һатып алыусы мөнәсәбәттәре үҙгәрешһеҙ ҡалды. Бигерәк тә "бутик"тарҙа һәм бәләкәй магазиндарҙа. Былай ғына инеү мөмкин түгел ул магазиндарға, һатыусы уҫал ҡарашы, тупаҫ теле менән сәнстереп тә ала. Һатыусылар көрсәк заманында тағы ла ныҡыраҡ уҫалланды, ә һатып алыусы уларҙан тағы ла ныҡыраҡ ҡурҡа...

Фәүзиә ЯХИНА.

бейеүсе, хореограф, үҙенсәлекле тарихи бейеүҙәр авторы Йәүҙәт Бикбирҙинға арналған документаль фильм Күсейҙә күрһәтелде. Үҙҙәренең талантлы яҡташтарын күсейҙәр онотмай, рәхмәт уларға, ләкин бер нәмә күңелде ҡыра: Йәүҙәт ағай һалған бейеүҙәрҙе башҡарғанда, ниңәләр, алып барыусылар уның авторлығын әйтергә онота. Уйлап ҡараһаң, республиканың күп райондарында ул ижад иткән бейеүҙәр башҡарыла бит.

Юлай Ишбулды улының фильмдары нигеҙендә Бөрйән-йылға ауылында мәҙәниәтебеҙ үҫешенә юйылмаҫ эҙ ҡалдырған ҡаһарман затыбыҙ Вилүр Рәхимголов, Байыш ауылында мәшһүр ҡурайсы Ташбулат Дәүләтшин, Йомашта данлыҡлы Юнысбаевтарға, Буранбайҙа "Буранбай варисТарЫ"на арналған сағыу сара үтте.

Шуныһын да билдәләргә кәрәктер: эстафета барышында һәр ауыл үҙенсәлекле, ауылдаштары өсөн күркәм булған сара үткәрергә тырышты. Ә шулай ҙа осрашыуҙың иң тулҡынландырғысы Таулыҡайҙа булды. Байрамда Юлай Ғәйнетдинов үҙе ҡатнашты. Ауылдаштары менән бергәләп Таулыҡайҙың 400 йыллығына арналған фильмды ҡаранылар. Ауылдаштары Юлай Ишбулды улына оло рәхмәтен белдерҙе.

"Хазина" тапшырыуҙарында ҡатнашырҙай яңы исемдәрҙе асыҡлау - "Алтын ҡомартҡы" сараһының тағы бер маҡсаты ине. Аллаға шөкөр, бар икән әле беҙҙә ундай таланттар. Улар беҙҙең арала йәшәй. Икенсе Әтҡолдан Рафаэль Хәлитов, Яңылбикә Арыҫланова, Ғәҙелбайҙан Фирғәт Әсәнов, Иҫке Сибайҙан Әлфиә Ибраһимова, Ишбирҙенән Фәнил Хәсәнов, Буранбайҙан Фәттәх һәм Фәнүр Аралбаевтар, Хәбир Раев, Урғаҙанан Рима Ғәлина, Ҡараталдан Хәмит Кәримов кеүек йырсыларыбыҙ моңдарында башҡорт халҡының мәңгелек йөрәк тибеше сағылды. Үрге Яйыҡбай ауылынан данлыҡлы Рәмил һәм Рәил Хәсәновтар ҙа эстафетаның йөҙөк ҡашы булды. Аһәңле йырҙары, көйҙәрҙең тарихын яҡшы белеүҙәре, әле көйләп, әле өҙләп, ҡурай тотоп сәхнәлә баҫып тороуҙары менән күпме кешеләрҙе дәртләндерә ошо егеттәр.

Күп йәштәрҙе оло сәнғәт юлына сығарған, күп йырҙар авторы һәүәҫкәр композитор Вилүр Мәүлитовҡа арналған кисә Күгиҙел ауылында үтте. Сарала уның ижадташ дуҫы, билдәле шағир, йырсы Фәнис Сирбаевтың ҡатнашыуы үҙе бер биҙәк булды. Улар бергәләп ижад иткән йырҙарҙы халыҡ яратып тыңланы.

Эстафета үткән ауылдарҙа сәхнәгә һәр сығышы алтын ҡомартҡыға тиң таланттар күтәрелде. Йәштәрҙең ҡатнашыуы сараларға айырыуса бер биҙәк өҫтәне. Йәнйегет ауылында Фәрүәз Рафиҡов исемле бик шәп егет үҫеп килә, Сибай институтының иҡтисад факультеты студенты. Үҙе думбырасы, өзләүсе, йырсы. Байыштан Инсаф Ҡолмөхәмәтов, Мерәҫтән Раушания Кинйәбулатова, Һаҡмарҙан Рәлиә Ямантаева, Темәстән Байрас Харисов - Баймаҡ бейеүселәре данын дауам иттереүселәр. Иҫке Сибайҙан бар яҡлап һәләтле Ғайсар Рәхмәтуллиндың сығышы барыһына ла оҡшаған. Баймаҡ лицей-интернатының 10-сы синыф уҡыусыһы, уҡыу алдынғыһы. Кәрешкәнән Гөлнара Казарбаева 6 йәштән "Урал батыр" эпосын яттан һөйләй, хәҙер ул эпосты ете телдә һөйләп, зона бәйгеһендә I урынды алған, Баймаҡ лицей-интернатының 10-сы синыф уҡыусыһы, уҡыу алдынғыһы. Кәрешкәнән Гүзәлиә Нәбиева скрипкала халыҡ көйҙәрен оҫта башҡарып, милләтебеҙҙең музыка сәнғәтенә сағыу бер биҙәк өҫтәне.

Эстафета тамамланды. Рәсәй киноһы йылында үткәрелгән мәртәбәле сараларҙың береһе булды ул. Һәр үткән сара күңелгә ниндәйҙер уй-фекер һала, һәр хәлдә, битараф ҡалдырмай. Донъяны баҫып килгән глобалләшеү, бар нәмәне аҡса менән үлсәү йәки әле бер, әле икенсе бәләкәй дәүләт халҡын юҡҡа сығарыу, ҡанға батырыу - беҙҙең быуынға ошо хәтәр ваҡиғалар эләкте. Бөгөнгө ҡатмарлы заманда һәр кеше өсөн ике бөйөк төшөнсә бар. Уларҙың береһе - милләтебеҙҙең мең йыллыҡтар аша юғалмай ҡалған башҡорт тигән заты булһа, икенсеһе аяулы, ҡәҙерле тыуған илебеҙ - Башҡортостан. Көн дә телевизорҙан күрһәтелгән ығы-зығы, тәбиғәт ғәрәсәттәрен ҡараған һайын, Хоҙайға мең шөкөр итәһең, әлдә әле ошо илдә, ошо ерҙә тыуғанбыҙ, ошо киң күңелле, ихлас милләттәштәр араһында йәшәйбеҙ, тип ҡыуанаһың. Ә ошо тарих боролоштарҙа, мең төрлө михнәттәр солғанышында беҙҙең милләт үҙенең рухи көсөн нисек һаҡлаған һуң? Беҙгә, бөгөн йәшәгәндәргә, ошо хаҡта уйланырға кәрәктер. Халыҡтың үҙен һаҡларҙай рухи көсө телебеҙҙә, боронғо көйҙәребеҙҙә, ҡурай, думбыра моңдарында, ҡаурый ҡәләмебеҙҙә. Сөнки улар һәр кешенең иң нескә, иң саф хистәрен, кешелек сифаттарын ҡуҙғыта торған көс ул. Юлай Ишбулды улының бөртөкләп йыйған аҫылдарҙан-асыл алтын ҡомартҡыһын быуындарҙан-быуындарға еткереү - шулай уҡ мәҙәниәтле кешеләрҙең мөҡәддәс бурысы ла инде.

**Луиза ДӘҮЛӘТШИНА,**
**проект авторы,**
**Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.**
**Баймаҡ ҡалаһы.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*

# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Ун икенсе сер: нисек ҡурҡыуҙы һәм борсолоуҙы еңергә?

Ҡурҡыу кешене тарихтың барлыҡ осорҙарында ла оҙата бара. Беҙҙең боронғо ата-бабаларыбыҙ йәшендән һәм күк күкрәүенән, ҡырағай хайуандарҙан һәм бер-береһенән ҡурҡҡан. Милләттәр араһында низағ килеп тыуһа, донъя яңы һуғыш хәүефе алдында тынып ҡала. Әгәр һуғыш булмай икән, беҙ уның киләсәктә булыу ихтималлығынан ҡурҡабыҙ. Уның араһында әһәмиәтле һәм әһәмиәтһеҙ нәмәләрҙән, ғаиләнә-тирәләге кешеләрҙән, көндәлек тормошобоҙҙағы хәл-тороштан ҡурҡабыҙ. Ә кеше тыуғанда уға бары тик ике төр ҡурҡыу бирелә: ҡолау һәм көслө тауыш. Бөгөн иһә ҡурҡыуҙың ниндәй генә формаһы юҡ: клаустрофобия - ябыҡ урындан ҡурҡыу; агорофобия - асыҡ урындан ҡурҡыу; элюрофобия - бесәйҙәрҙән ҡурҡыу; астрофобия - йәшендән һәм күк күкрәүҙән ҡурҡыу; гематофобия - ҡандан ҡурҡыу; акрофобия - бейеклектән ҡурҡыу; гидрофобия - һыуҙан ҡурҡыу; никтофобия - ҡараңғылыҡтан ҡурҡыу; һәм шуларҙың иң ҡурҡынысы - уңышһыҙлыҡтан ҡурҡыу.

Ҡурҡыу - үҙ-үҙеңдә тулы ышаныс формалаштырырға тырышыуығыҙға ҡыйратҡыс һөжүм яһарға һәләтле емергес хис-тойғолар. Әгәр ҡурҡыуығыҙға үҙегеҙҙе еңергә рөхсәт итһәгеҙ, бер ваҡытта ла хыялығыҙҙағы тормошто төҙөй алмаясаҡһығыҙ.

**Уңышһыҙлыҡтарығыҙға репетиция яһамағыҙ, ә уларҙы еңегеҙ.** Уңышһыҙлыҡҡа көйләнеп, үҙегеҙҙе шундай һөҙөмтәгә этәрәһегеҙ. Даими рәүештә уңышһыҙлыҡҡа репетиция үткәрәһегеҙ. Көнөнә нисә тапҡыр буласаҡ хаталарығыҙ тураһында уйлайһығыҙ? Кешеләргә берәй ваҡыт уңышһыҙлыҡ кисерәсәгегеҙгә ныҡлы инаныуығыҙ тураһында әйткәнегеҙ бармы? Үҙегеҙҙе: "Йүнһеҙмен дә инде", - тигән фекергә тотҡанығыҙ бармы? Йәки уңышһыҙлыҡ өсөн мендәрсә сәбәп уйлап табаһығыҙмы? Был үҙенә күрә кире репетиция бала саҡтан ҡаныҡҡан һеңгән көйәф менән бергә барлыҡ тормош ауырлыҡтарына һәм көрсөккә бер һүҙ менән яуапларға мәжбүр итә: "Булдыра алмайым!"

Уңышһыҙлыҡтан ҡурҡыуҙы енер өсөн нимә эшләргә кәрәк? Беренсенән, уңышһыҙлыҡтың күҙенә ҡарарға. Ниндәй ҙә булһа эшкә тотонор алдынан үҙегеҙҙән: "Була торған нәмәнең иң насары ниндәй?" - тип һорағыҙ. Эстән уңышһыҙлыҡҡа әҙер булығыҙ. Бында эске әҙерлек менән көтөүҙе аңыҡ сикләргә кәрәк. Мин, һеҙ уңышһыҙлыҡ көтөргә тейешһегеҙ, тимәйем, сөнки был осраҡта кире һөҙөмтәне тартып килтерәсәкһегеҙ. Мин иң насар һөҙөмтәгә әҙер булған кеше хатта иң етди көрсөктә лә уңышлы енеп сыға алырлыҡ ышаныс эйә булыуы тураһында аңлатам.

Беҙ күп нәмә тураһында борсолабыҙ: шул сәбәпле әлеге мәл менән йәшәмәйбеҙ. Ошо хаҡта уйланығыҙ. Һеҙ бер генә осраҡта хафалана алаһығыҙ: йә үткәндәр менән йәшәйһегеҙ, йә киләсәк менән. Әгәр әлеге мәл менән йәшәһәгеҙ, борсолорға сәбәп юҡ. Мәсәлән, әлеге секундта берәй нәмә тураһында борсолаһығыҙмы? Әлбиттә, юҡ! Ни өсөн? Сөнки ошонда яҙылғандарҙы уҡыйһығыҙ һәм иғтибарығыҙ ошо мәлдең барлыҡ хафаланыуҙарын ситтә тота. Аң бер юлы ике мәғлүмәтте эшкәртә алмай.

Ҡурҡыуҙы еңеүҙең иң яҡшы ысулы - көн артынан көн менән, ә унан да яҡшыһы - мәл артынан мәл менән йәшәү. Үҙегеҙгә: "Алдағы бер нисә минутта, сәғәттә йәки көндә мин..." тип, ыңғай раҫлау булдырығыҙ һәм ошо вәғәҙәгеҙҙе күрһәтелгән ваҡыт осоронда ғына үтәгеҙ. Киләсәк тураһында онотоғоҙ. Әгәр һеҙ мәлдәр менән йәшәй башлаһағыҙ, тормошоғоҙҙа хәүефкә урын ҡалмаясаҡ.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

*МӨҒЖИЗӘЛЕ ДОНЪЯ*



# ХӨРӘФӘТИ ХИКӘЙӘЛӘР,

## йәки йәнәшәбеҙҙә кемдәр йәшәй?

### Ҡытый-ҡытый уйнайыҡ, тиме...

Мин малай саҡта Мәксүт ауылынан Сәләхетдин ағай беҙгә килгән саҡтарҙа шүрәле тураһында һөйләй торғайны. Ысынмы-бушмы, уныһын белмәйем, ишеткәнемде һөйләйем.

Элек кеше урманға йоҡларға сығып китеп, ятып эшләп, күнәк яһай торғайны. Бер көн Сәләхетдин ағай, ҡустылы Шәмсетдин, Ҡотандан Фазлетдин ағай урманға күнәк яһарға сығып китәләр. Байтаҡ күнәк яһап, ылашка һалып, аҫтан ут яғалар. Ҡараңғы төшә. Бер ваҡыт алыҫтан ҡысҡырған тауыш ишетелә. Тауыш яҡыная торғас, һүҙҙәрен дә айырып була башлай:

- Фазлетди-и-ин, Шәмсетди-и-ин, Сәләхетди-и-ин!

Тауыш Ағиҙел арьяғынан яҡыная килеп, яр башынан ишетелә:

